ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

2-8 сентябрь (нарысай) 2023

№34 (1076)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Телевизорһыҙ бер йыл,**

йәки Үҙ-үҙеңә ҡайтыу



6

**Уҡытыусыларығыҙға...**

ваҡытында рәхмәт әйтергә өйрәнегеҙ!



8-9

**Халыҡтан алып,**

кире халыҡҡа ҡайтарыу бәхет ул!



11

**Зөлфирәнә уҡыйыҡ әле...**



12

*Иғтибар! 1 сентябрҙән 2024 йылдың беренсе яртыһы өсөн гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы башланды. Аҡлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы ошо осор өсөн дә "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзитенә 857 һум 04 тингә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе еткерәбеҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласаҡ икәне тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

*МӨХӘРРИРИӘТ.*

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Яңы уҡыу йылына әҙерлек ниндәй мәшәҡәттәр, проблемалар тыуҙырҙы?



***Мораҙым ӘЛИМБАЕВ, Мәсетле районы:*** Былтыр өйҙән ике балабыҙ 1 синыфҡа уҡырға барҙы, шуға күрә төп сығымдар уҙған йылда булды. Өҫтәл һәм ултырғыстар, яҡтыртыу лампаһы, сумка, мәктәп формаһы һәм башҡалар өсөн яҡынса 100 мең һумдан күберәк аҡса сыҡты. Быйыл бары тик аяҡ кейеме һәм канцелярия тауарҙары ғына кәрәк, мәктәп формалары тап-таман әлегә, көҙ-ҡыш кейерлек курткалары ла бар.

Беҙҙең өсөн иң мәшәҡәтлеһе - балаларға сифатлы, тотош синтетиканан тормаған кейем табыу. Улар көндөң күп өлөшөн мәктәптә ошо кейемдә кейеп үткәрә, шуға күрә "тын алған" тауарҙан тегелгән әйбер эҙләп хәл бөттө. Бер блузканы ҡатыным интернет магазиндан яҙҙырып алды, икенсеһен махсус тектерҙе. Ҡыйбатыраҡҡа төштө, ләкин һаулыҡта экономияларға кәрәкмәй.

Элек беҙ китапты гәзит менән тышлай ҙа йөрөй инек, хәҙер махсус тышлыҡ талап итәләр. Улары йә бөләкәй була, йә, киреһенсә, ҙур. Ғәҙәттә, тышлыҡтарҙы берәмләп түгел, ә күмәртәләп алаһың һәм улар кәрәкмәгән әйбер булып тулып ята. Шуға күрә быйыл китаптарын таратып бөткәс, уларҙы магазинға алып барып, тышлыҡтарҙы кейҙереп ҡарап алырға булдыҡ. Мәшәҡәтле, әммә файҙалы эш.

Беҙҙең күрергә теләгән әйбер менән балаларҙың кейергә теләгән әйберҙәренең тура килмәүе тағы бер проблема. Беҙ сифатлы, оҙаҡҡа етерлек кейемдәр һәм канцелярия тауары ҡараһаҡ, уларға матуры, йылтырап торғаны, ғәҙәти булмағаны кәрәк. Ике быуындың бәхәсе тыуа һәм уны хәл итеү ваҡыт һәм көс талап итә. Енеүселәр рәтендә ике яҡ та булғаны бар.

Мәктәпкә әҙерлекте мин мәшәҡәт итеп түгел, ә байрамға әҙерлек итеп ҡарарға саҡырам барыһын да. Әгәр ҙә ата-әсә борсолоу, ҡәнәғәтһеҙлек белдереп йөрөй икән әҙерләнгәндә, унын хәл-торошо балаға ла күсә һәм ул мәктәпкә теләкһеҙ генә бара. Һәм тағы ла балалар алдында, бөләкәй булһынмы ул, ҙурмы, мәктәпкә әҙерлектең финанс яғы тураһында һөйләшмәҫкә кәңәш итер инем. Улар - беҙҙең балалар, уларҙың бәхетле, етеш һәм кәнәғәт бала сағы - беҙҙең бурыс. Әйҙәгеҙ, уларға негатив фекерҙәр менән ҡағылмайынса, матур итеп әҙерләп, белем усағына оҙатып ҡуяйыҡ.

## БАШ ҠАЛАМ

# ҺӘР МИҘГЕЛДӘ МАТУР!

**Өфөбөҙ һәр миҙгелдә лә матур. Ә һуңғы йылдарҙа ул өҫтәүенә унайлы, заманса ҡалаға әйләнде. Өфөләр һәм килгән ҡунаҡтар өсөн бөтә шарттар тыуҙырыу маҡсатында әүҙем эшмәкәрлек алып барылыуын һәр кем күреп-белеп тора. Шәхсән үҙем баш ҡалаға килгән һайын ниндәйҙер күркәм яңылыҡ табам. Күҙемә эленгәндәре тураһында гәзит уҡыусыларына ла бәйән иткем килә.**

Тәү сиратта, "Башҡорт ихаталары" программаһын телгә алғым килә. Был, ысынлап та, бар яҡлап уйланылған һәм кәрәкле проект, сөнки уға ярашлы Өфөнөн ихаталары тағы ла матурайып, бөхтәләнеп ҡала. Яңыраҡ баш ҡаланың Өшсе хәбәрселәр - Аврора - Степан Кувыкин урамдарында йөрөргә тура килде һәм ундағы ихаталарҙың төҙөк һәм унайлы булыуына һөйөндөм. Балалар өсөн уйайлы һәм хәүефһеҙ майҙансыҡтар эшләнгән, спорт яратыусылар өсөн дә бөтә шарттар булдырылған, хаҡлы ялдағылар рәхәтләнеп ағас һалҡынында ғына матур эскәмйәләрҙә аралашып ултыра. Бик мәслихәт эштәр атҡарыла, афарин ҡала һәм республика етәкселәренә.

Был тема менән ҡыҙыҡһынып, шуны белдем: "Башҡорт ихатаһы" программаһына ярашлы, быйыл 61 торлаҡ йортто үҙ эсенә алған 18 ихата биләмәһенең бераүһендә эштәр тулыһынса тамамланған, ә 17-һендә - 88 процент башҡарылған.

(Дауамы 2-се биттә).

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# МЫСЫРҘА БУЛҺАҢ...



**Роспотребнадзор Мысырҙан килгән рейстарға санитария һәм карантин контролен көсәйтә. Быныҥ сәбәбе - Мысырҙың Һаулыҡ һаҡлау һәм халыҡ министрлығының Кена провинцияһында (Ҡаһирәнән 600 километр көньяҡтараҡ) билдәһеҙ сир осрағы теркәлеү тураһында мәғлүмәт.**

Хәбәр ителеүенсә, ауырыу билдәләре денге бизгәгенә оҡшаш. Әлеге ваҡытта ведомство сирҙең үҙенсәлеге, таралыу хәүефе һәм эпидемияға ҡаршы иҫкәртеү саралары тураһында өҫтәмә мәғлүмәт алыу өсөн Мысыр һәм халыҡ-ара ойошмалар менән үҙ-ара эш итә. Денге бизгәге Көньяҡ-Көнсығыш Азияла (Таиланд, Индонезия, Ҡытай, Малайзия, Япония, Вьетнам, Мьянма, Сингапур, Филиппин), Һиндостан, Африка (Мозамбик, Судан, Мысыр), Төньяҡ, Үҙәк һәм Көньяҡ Америка (Мексика, Гондурас, Коста-Рика, Пуэрто-Рико, Панама, Бразилия һ. б.) тропик һәм субтропик зонаһында киң таралған.

Бизгәкте Aedes aegypti серәкәйе тарата, ауырыу кеше эпидемиологик хәүеф тыуҙырмай. Шулай ҙа Роспотребнадзор Мысырҙа ял итергә йыйынған туристарҙы иҫкәртә: йоғошло һәм паразит ауырыуҙарҙы булдырмаҫ өсөн һаҡ булырға - тирене мөмкин тиклем ҡаплаған кейем кейергә, бөжәктәрҙе ҡурҡытыусы һәм юҡ итеүсе саралар, тәрҙә һәм ишектәрҙә селтәр ҡулланырға кәңәш итә. Сәйәхәттән ҡайтҡас һәм хәл насарайған осраҡта табипҡа мөрәжәғәт итергә, сәфәр урыны тураһында мотлаҡ хәбәр итергә кәрәк.

12+

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

✓ *Яңы блоктың бурысы яңы донъяуи тәртип булдырыу, яңы донъя төҙөү, күп полярлыҡҡа йүнәлеш тотоу; был донъя бер илдең хакимлығынан азат булып ысын мәғәнәлә ғәҙел, халыҡ-ара хоҡуҡ нигеҙҙәренә таянасаҡ.*



*БАШ ҠАЛАМ*



# ҺӘР МИҘГЕЛДӘ МАТУР!

**(Башы 1-се биттә).**

Өфөнөң йәшел ҡала булып ҡала килеүе парк, скверҙарҙың күпләп һаҡланыуына бәйле. Баш ҡала үҙәгендәге билдәле Аксаков паркы әллә күпме быуындың яратып ял иткән урыны. Унда төҙөкләндереү эштәре башланыуын ҡыуанып ҡабул иттем, сөнки был эш күптән кәрәк ине. Эштәр тамамланғандан һуң тарихи аллея, күл буйы, әҙәби ҡунаҡхана, ваҡиғалар (событийный) һәм балалар майҙансыҡтарынан торған парктың үҙ ишектәрен асыуын түҙемһеҙләнеп көтәбеҙ. Күпме студент, шул иҫәптән үҙем дә, Аксаков паркында дуҫтар, һөйгәндәр менән йөрөгәнгә ундағы йөҙйәшәр ағастар шаһит. Шуға күрә үҙебеҙҙең йәшлек миҙгелдәребеҙ шаһиты - ағастарға теймәҫтәр, тип ышанам. Шулай уҡ парктың визит карталы булған арка ла тәүге торошонда әйләнеп ҡайтыр, тип өмөтләнәм.

Эш буйынса Орджоникидзе районынын Лев Толстой урамы башында булырға тура килде. Урамдың 3-сө һәм 5-се йорттары ҡаршыһында элек ташландыҡ ер ята ине, әле иһә ҡеүәтле трактор һәм башҡа техника геүләтеп яңы аллея эшләй. "Асыҡ ялан" тип аталған аллеяла йәйәүлеләр өсөн юл эшләнеп бөткән тиерлек, шулай уҡ эштең паспортына ярашлы был ерҙә төрлө ағастар һәм ҡыуаҡтар ултыртылыуы күҙаллана. Урындағы халыҡ өсөн матур ял урыны барлыҡҡа киләсәк, ә Өфө тағы ла бер йәшел утрауға байыясаҡ.

Улымдың йәшәгән урыны Кузецов затоны күңеләмә бик яҡын. Элекке һаҙлыҡ урынында хәҙер әллә күпме йорт төҙөлөп, менәрләгән кеше йәшәй. Ләкин әлеге мәлдә Пугачев урамының төҙөкләндерелеүе һеҙөмтәһендә бөтә машина ағымы микрорайон аша үтә. Ә ҡайһы бер водителдәрҙең йәшел газон аша йөрөүе, тротуарҙарға уҡ сығыуҙары хәүеф тыуҙыра. Был хәлде нисектер иҫкәртеү йәйин табырға ине. Ваҡытлыса унайһыҙлыҡтарға түҙерлек булһа ла, ошондай тәртип боҙоусылар, башҡалар тураһында уйламаған әҙәмдәр күңелде өйкәй.

Ғөмүмән алғанда, алдан әйтеүемсә, Өфөбөҙ ҙурая, гүзәлләнә һәм йәшелләнә. Артабан да ошо йүнәлеш дауам итһен ине. Беҙ баш ҡаланы бик яратабыҙ һәм уның һәр ваҡыт матур булыуын теләйбеҙ.

**Ғәбит СӨЛӘЙМӘНОВ.**
**Бөрйән районы.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# САММИТ ТАРИХЫ...

## өр-яңы битен асты

**Үткән аҙнаның ғына түгел, ә донъя кимәлендәге ҙур, мөһим ваҡиға булды 22-24 августа Көньяҡ Африка Республикаһының баш ҡалаһы Йоханнесбургта булып үткән БРИКС илдәре (Бразилия, Рәсәй, Һиндостан, Ҡытай, Көньяҡ Африка Республикаһы) саммиты.**

"БРИКС-тың ошоға тиклемге бөтә йыйындары ла мөһим ине, һүҙ ҙә юҡ, ләкин быйылғы 15-се саммит айырыуса үҙенсәлеге менән айырылып торҙо һәм уны тарихи саммит тип атарға булыр ине", - тине был оло ваҡиға хаҡында Халыҡ-ара эштәр буйынса Рәсәй советы етәксеһе Андрей Кортунов. Был йыйынды сәйәсмән кеше ғүмеренең яуаплы ла, хәүефле лә 15 йәшлек үҫмер осоро менән сағыштырҙы. Ул үтәсәк көн якынлашҡан һайын халыҡ-ара йәмәғәтселектең уға иғтибары ла, шул уҡ ваҡытта һәр төрлө хәбәр һәм интригалар ҙа ҡуйыра барҙы, сөнки күптәрҙе унда Рәсәй тарафынан кемдең ҡатнашасағы, бөгөнгө халыҡ-ара сәйәси хәлдәрҙә ниндәй мәсьәләләр ҡараласағы, нindәй ҡарарҙар ҡабул ителәсәге - бөтәһе лә мөһим ине һәм төрлө илдәрҙең ябай граждандары ла хатта уға битараф ҡала алманы. Берҙән, билдәле сәбәптәр арҡаһында саммит эшендә РФ Президенты Владимир Путиндың туранан-тура түгел, ә видеобәйләнеш тәртибендә ҡатнашыуы һәм, саммитта шәхсән ҡатнашып та, бизнес-форумда Ҡытай Республикаһы рәйесе Си Цзиньпин үҙе түгел, ә ҠХР сауҙа министрының сығыш яһауы көтөлгән тәьҫораттарҙы тоноҡландыра төшөүгә ҡарамаҫтан, Рәсәй лидерының онлайн сығышы сәйәси йәмәғәтселек аңын уятып ебәргәндәй булды. Уның белдереүенсә, БРИКС кемгәлер ҡаршы тороу йә емереү маҡсатын ҡуймай. Яңы блоктың бурысы яңы донъяуи тәртип булдырыу, яңы донъя төҙөү, күп полярлыҡҡа йүнәлеш тотоу; был донъя бер илдең хакимлығынан азат булып ысын мәғәнәлә ғәҙел, халыҡ-ара хоҡуҡ нигеҙҙәренә таянасаҡ; был блокта ағза булып тороусы илдәр халыҡтарының үҙ үҫеш юлы, үҙаллылығы ихтирам ителәсәк - ҡыҫҡаһы, күп полярлылыҡҡа йүнәлеш тотоласаҡ. Ә инде был Американи борсой икән, тимәк, беҙ дөрөҫ юлда, тине В. Путин. Уның билдәләүенсә, Көнбайыштың үҫешеүсе илдәргә ҡаршы йүнәлтелгән колониаль сәйәсәте Көнбайыштың үҙенә зыян булып ҡайта: был әле үк донъяның күп өлөшөнөң АҠШ һәм Европа берлегенән йөҙ бороуында ла асыҡ күренә. Беҙ үҙен өҫтөн ҡуйған бер илдең икенсе ил өҫтөнән хужа бу-

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

**?**

## *Яңы уҡыу йылына әҙерлек ниндәй мәшәҡәттәр, проблемалар тыуҙырҙы?*

***Илмир ҒИБАҘУЛЛИН, Әбйәлил районы:*** Беренсе синыфҡа барғанынан алып колледжда уҡып йөрөгәненә хәтлем 5 бала беҙҙең ғаиләлә. Һуңғы ҡыңғырау булып, июнда иркен тын алып ҡалабыҙ ҙа, июль етһә, магазиндарҙағы хаҡтарға ҡарап, күҙ тартыша башлай. Хоҙайға шөкөр, эш урыныбыҙ бар һәм көнөнә-сәғәтенә тиклем эш хаҡы килеп тора. Ләкин беҙ кәрәк-ярақты алдан алыу тигәнгә өйрәнә алманыҡ инде. Кеше йәтеш кенә итеп бөтә нәмәне алдан алып, әүеш-теүеш итеп ҡуя ла, сентябрҙә мәктәпкә әҙергенә барып инә. Беҙ иһә, һуңға тиклем һуҙып йөрөйбөҙ ҙә, август аҙағында саба башлайбыҙ.



Тәүҙә, беҙҙенсә әйткәндә, городҡа, йәғни Мәгнит ҡалаһына, ололарын алып барабыҙ. Беҙ бала сакта бөтә Әбйәлил халҡы балаларын цирк янындағы базарҙа кейендерҙе, хәҙер ҙә шулай. Бер машина булып тейәлешеп барып төшәбеҙ, геү килеп баҙарҙы бер урайбыҙ. Урайбыҙ тигәс тә, мин ҡатыным һәм балалар артынан әйәреп кенә йөрөйөм. Икенсе тапҡыр урағанда кейеп ҡарарға әҙер булабыҙ, өсөнсөһөндә инде, ниһайәт, һатып алабыҙ.

Минең өсөн иң проблемалы хәл - балаларҙың әллә ниндәй аңлайышһыҙ, һуҙылып, ендәре тубыктарына тиклем һәленеп төшөп торған әйбер алдырыуҙарын ҡабул итеү булды. Малайҙары ла, ҡыҙҙары ла бер иштән кейенә, тиҙ генә айырып та булмай кемдең кем икәнен. Икенсе проблема аяҡ кейеме һайлағанда башлана. Һуң ҡыҙҙар матур ғына сандали, туфли кейеп йөрөгән замаңалар бөтөнләй үттеме әллә шул? Ни өсөн барыһы ла кроссовкиға күсеп бөттө һуң? Был мәсьәләгә килеп етһәк, мин балаларҙан, улар минән баш тартыр хәлгә төшөп, ҡатын менән айырылып сиккә етеп килеп сығабыҙ баҙарҙан. Уҡытыусылары ла бер нәмә әйтмәй, тиер инен, улар үҙҙәре лә күбеһе шул аяҡ кейемендә йөрөй.

Канцелярия тауарҙарына мин бөтөнләй ҡыҫылмайым хәҙер. Дәфтәр һатып алаһын, бактиһән, һәр фәндең үҙенең әллә нисә өлөштән торған махсус дәфтәрҙәре була икән. Ат хаҡы түләп һатып алалар ҙа, уҡыу йылы бөтөүгә уларының яртыһы буш булып тороп ҡала. Ни бысағыма ул тиклем дәфтәр алдыралар, әгәр кәрәкмәй икән.

Колледжда уҡыған олоһо быйыл 3 курсҡа бара. "Һеҙгә быйыл ятаҡ булмай", тип яҙып ята кураторҙары. Бәй, ҡайҙа йәшәргә тейеш икән ул студенттар, аптырарһың. Фатирҙы ҡуртымға алып йәшәр өсөн, аҡса кәрәк. Шул мәсьәләне хәл итәһе бар яҡын арала.

Бәләкәстәренең әллә ни мәшәҡәте юҡ, ниндәй кейем алһаң да ризалар, етмәһә, башланғыс синыфтарҙа - берҙәм кейем. Һәр бер ручкаға һәм төҫлө ҡағыҙға ҡыуаныр, мәктәпкә барасаҡ көндәрен түҙемһеҙләнеп һанайҙар. Беҙгә, ата-әсәләренә лә, уларҙың ошо энтузиазмдарынан бер өлөш сыҡһа, шәп булыр ине. Нисек кенә булмаһын, барыбыҙға ла, ата-әсәләргә, балаларға, уҡытыусыларға тыныс һәм һөҙөмтәле уҡыу йылы насип булһын.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Һуңғы арала Башҡортостанда 20-27 кешенең коронавирус йоҡтороуы теркәлә. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, әлеге ваҡытта 48 пациент стационарҙа, 404 кеше өйҙә дауалана. Инфекция госпиталдәрендә коронавирус сирен дауалау өсөн 75 койка урынлаштырылған, буш урын фонды 26,7 процент тәшкил итә. Башҡортостанда COVID-19 таралыу коэффициенты - 1,0, Рәсәйҙә - 0,98.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, Рәсәй Геройы Миңлеғәле Шайморатовтың тыуған көнө унайынан Өфөнөң Совет майҙанында үткән тантаналы сарала ҡатнашты. Ул республикабыҙҙа икенсе йыл рәттән ойошторолған "Геройҙар ваҡыты" Бөтә Рәсәй патриотик йырҙар конкурсында еңеүселәрҙе тәбрикләне, шулай уҡ "Ватан" башҡорт ирекле отряды хәрбиҙәренә Шайморатов миҙалын тапшырҙы.

✓Хәҙер һәр шәмбе, һауа торошоноң ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, яҙ, йәй, көҙ һәм ҡыш көндәрендә генерал Шайморатов һәйкәле янында почетлы ҡарауыл торорға тейеш. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров почёт ҡарауылы менән хәтер вахтаһына старт бирҙе. Тәүгеләрҙән булып был хоҡуҡты ин яҡшы йәш армеецтар алды. Часовойҙар хәтер вахтаһында йәйгеһен - киске сәғәт 7-нән 9-ға, ҡышын иһә көндөҙгө 12-нән 2-се яртыға тиклем тора.

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусын төҙөү буйынса күсмә кәңәшмә үткәрҙе. Әлеге көндә объектта төҙөлөш эштәре дауам итә, шулай уҡ территорияны төҙөкләндереү ҙә бара. Кампустың тәүге өлөшө йыл аҙағында тапшырылырға тейеш. Шуға ла төҙөлөш-монтажлау буйынса эштәр яҡшы барһын өсөн өҫтәмә рәүештә төҙөүселәр йәлеп итергә ҡушылды.

✓Башҡортостандың Ҡытай менән үҙ-ара тауар әйләнеше 2023 йылдың тәүге яртыһында 88 процентҡа тиерлек арткан. Был хаҡта республика премьер-министры Андрей Назаров хәбәр итте. Уның мәғлүмәттәре буйынса, экспорт һәм импорт күләме лә 82 процент һәм 155 процентҡа күбәрәк. Республиканың Ҡаҙағстан менән хеҙмәттәшлегендә лә уңыштар билдәләнә. Тауар әйләнешенең - 4 процент, ә экспорттың 9,5 процентҡа артыуы күҙәтелә.

**✓ Ул сумканың ауырлығы иҫ киткес. Сит илдә йәшәгән танышым балаларҙың мәктәпкә бәләкәй генә тәгәрмәсле мәктәп сумкаһы менән йөрөүҙәрен әйткәйне, ҡыҙғаныҫҡа күрә, бында ундайҙы таба алманым.**



лыуына, ниндәй ҙә булһа гегемонияға ҡаршыбыҙ, тине Владимир Путин.

Әммә Көнбайыш һаман булһа үҙенең колониаль сәйәсәте иллюзияһында йәшәүен дауам итә: Африка һәм Азия илдәрен талай, бөлгөнлеккә, төшөрә, ҡол итә. Бер заман ошо иҙелгән һәм кәмһетелгән илдәрҙең бергә тупланып, залимлыҡ сәйәсәтенә ҡаршы тора алыу мөмкинлегенә әйә булырын улар күҙ алдына ла килтермәй. Рәсәй Президенты шулай уҡ БРИКС илдәренең донъя аренаһындағы хәле, уларҙың бер-береһе менән бәйләнешен нығытыу һәм үҙ-ара иҫәп-хисапта милли валюта булдырыу мәсьәләләренә лә ҡағылды. Ысынлап та, Рәсәй генә түгел, ҡайһы бер башҡа илдәр ҙә Америка долларына бәйлелектән ҡотолоу юлдары эҙләй һәм альтернатив түләү системаһын файҙаланыуға күсә башланы. БРИКС ағзалары булып торған илдәр етәкселәре халыҡ-ара сауҙа өлкәһендә һәм финанс операцияларында милли валюта файҙаланыуҙы тиҙләтеү мәсьәләһен бер тауыштан хуплап ҡаршы алды. В. Путин әйтмешләй, долларҙан баш тартыу кире ҡайтарғыһыҙ күренешкә әйләнәсәк. БРИКС илдәре сиктәрендә экспорт-импорт алыш-бирешендә долларҙың өлөшө кәмей бара һәм ул былтыр ни бары 28,7 процент ҡына тәшкил итте.

Шуныһы ҡыуаныслы: БРИКС берлеге сафтары артыуға табан бара. Йомғаҡлау матбуғат конференцияһында сығыш яһап, Көньяҡ Африка Республикаһы президенты Сирил Рамафос 2024 йылдың 1 ғинуарынан берекмәнең тулы хоҡуҡлы ағзалары исемлеген уҡып ишеттерҙе. Донъяның төрлө тарафтарынан 6 ил - Аргентина, Египет, Иран, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре, Сәғүд Ғәрәбстаны һәм Эфиопия БРИКС берлегенә ағза булып инергә теләк белдерҙе. Был факт Европа һәм АҠШ өсөн ярайһы ҙур юғалтыу ул, сөнки улар өсөн, мәҫәлән, Сәғүд Ғәрәбстаны һәм уның ресурстары бик мөһим әһәмиәткә әйә ине бит. ТАСС иҫәпләүҙәре буйынса, яңы ағзалар менән тулыланғандан һуң БРИКС берлеге донъя нефть запастарының 44,3 процентына әйә буласаҡ, ә теге "етәү төркөмө"нә, йәғни АҠШ, Бөйөк Британия, Германия, Италия, Канада, Франция һәм Японияға (G7) - ни бары 3,9 процент тәтейәсәк. Хәҙер БРИКС илдәренә 48,5 млн кв.метр, йәғни Ер шары майҙанының тотош 36 проценты тап килә. Был инде "теге етәү"ҙән ике тапҡырға ҡуберәк, тигән һүҙ. Киңәйтелгән БРИКС илдәренең тулайым эске продукты донъя күләменән 37 процент тәшкил итә, ә был илдәрҙә Ер шары халҡының 46 проценты йәшәйәсәк.

Шуны ла әйтмәйенсә булмай, сөнки саммитта аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлегенә ҡағылышлы мәсьәләгә лә ҙур иғтибар бирелде: 2021 йылда донъя аҙыҡ-түлек етештереү (иген) күләменең 49 проценты, йәғни ҡап яртыһы, шулай уҡ дөгө етештереү буйынса 55 проценты БРИКС илдәре өлөшөнә тура килә. БРИКС илдәренең тағы бер өҫтөнлөгө: юғары технологиялар өсөн кәрәкле металл табыу буйынса ла донъя күләме өлөшө "теге етәү"ҙекенән күпкә юғары: алюмин -79 процент (G7 - 1,3 процент) һәм палладий табыу өлөшө 77 процент (G7 - 6,9 процент). Был өҫтөнлөктәр һис тә сик түгел, сөнки БРИКС сафтарының артыуы киләсәктә лә дауам итәсәк.

Тап бына шуға күрәләр ҙә, моғайын, 15-се саммит эшмәкәрлеге, Вашингтон менән Брюсселдең яһалма битарафлығына ҡарамаҫтан, Көнбайыш тарафтарынан хәүеф ҡатыш көнсөл күҙәтеү аҫтында барҙы. Ә шулай ҙа АҠШ конгресы ағзаһы Тейлор Грин социаль селтәрҙәге диуарында БРИКС-тың АҠШ иҡтисадын ҡаҡшатыуы һәм долларҙы юҡ итәсәге хаҡында хафаланып яҙып сыҡты. Ә Франция сәйәсмәне Флориан Филиппо БРИКС-ҡа яңы илдәрҙең килеүен "глобаль революция" тип атаны, сөнки нефть табыуы тугыҙ илдең алтауһы БРИКС-ҡа китәсәк һәм был АҠШ позицияһын ҡаҡшатасаҡ, тип яҙҙы ул. Яңы йылдан БРИКС составына инәсәк алты илдән тыш, тағы ла 22 ил: Алжир, Бангладеш, Бахрейн, Беларусь, Вьетнам, Боливия, Венесуэла, Гондурас, Индонезия, Ҡаҙағстан, Палестина, Таиланд, Сенегал һәм башҡа илдәр ҙә берекмәгә инергә ғариза биргән. Саммит эшмәкәрлеге буйынса йомғаҡлау матбуғат конференцияһында сығыш яһап, Көньяҡ Африка президенты Сирил Рамафос ошо айҡанлы, 15-се саммит үҙенең тарихында яңы битен асты, тип бик дөрөҫ әйтте. Киләсәктә теләһә ниндәй яҫҡыныуҙарға, үҫешкә аяҡ салыуҙарға бирешмәҫлек, үҙ-ара ихтирам һәм берҙәмлеккә ҡоролған, донъя илдәренең тигеҙ-тиң хоҡуҡлы үҫешенә юл асыусы берекмәнең киләсәге ғәйәт ҙур. Шулай булһын!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Яңы уҡыу йылына әҙерлек ниндәй мәшәҡәттәр, проблемалар тыуҙырҙы?

***Раушания АҪЫЛБАЕВА, Мәләүез районы:*** Дөрөҫөн әйткәндә, әгәр ҙә аҡсаң булһа, мәктәпкә әҙерләнеүҙең хәҙер мәшәҡәте юҡ. Магазин тулы әйбер, интернеттан да яҙҙырып алырға мөмкин. Беҙ уҡыған саҡта ағай-апайҙарҙан ҡалған әйбер кейеп, мәктәпкә йөрөнөк, ручка йә ҡәләм юғалтыу тураһында һүҙ ҙә булманы, ҡәҙерләп-һаҡлап ҡына тоттоҡ. Ә хәҙер йәнең теләгән бөтә нәмә бар, ә әйберҙең ҡәҙере юҡ.



Балаларҙы мәктәпкә әҙерләргә һәм уҡыу йылы барышында кәрәкле әйберҙәр алыуға, мәктәп фондына бирергә, уҡыу әсбаптарына һәм башҡа ваҡ-төйәккә тип иртә яҙҙан бер-ике быҙау алып үҫтерәбеҙ. Әле бына уларҙы 35-40 меңгә һатабыҙ. 4 баланың һәр береһен кейендереүгә генә лә кәмендә, 10-ар мең һум, ә колледждың кадет класында уҡыған ҡыҙыбыҙҙың махсус кейеменә 25 мең һум кәрәк. Иң күп сығым өҫ һәм аяҡ кейеменә китә. Бер-бер артлы үҫеп килгән ҡыҙҙарға көҙгө һәм ҡышҡы курткалар апайҙарынан ҡала, шуға был йәһәттән әллә ни күп аҡса түкмәйбеҙ. Иң бәләкәйе булған малайға ла башҡа туғандарҙан кейем-һалым килеп тора.

Быйыл беҙҙең алда торған иң ҙур проблема - улыбыҙҙың мәктәпкә барырға психологик яҡтан әҙер булмауы. 8 йәше тулып үтте июлдә, һаман мәктәпкә ебәрмәйенсә тотоп та булмай. Медосмотр үткәндә психолог та ошо проблемаға баҫым яһаны. Ауылда балалар баҡсаһы булмау сәбәпле, һәр саҡ өйҙә, әсәһе янында, апайҙары ҡурсыуы аҫтында үҫкән иркә генә малай. Әле булһа, әсәһе булмаһа, өләсәләрендә лә ҡалмай хатта. Был беҙҙең кәмселек һәм уны төҙәтеүе еңел булмаясаҡ.

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Яңы уҡыу йылына әҙерлек ниндәй мәшәҡәттәр, проблемалар тыуҙырҙы?



***Гөлсәм ЯМАЛОВА, Өфө ҡалаһы:*** Ғаиләлә ике бала тәрбиәләйбеҙ. Улыбыҙ 4-се синыфҡа уҡырға бара, ҡыҙыбыҙ тәү башлап мәктәп ишеген асырға тора. Мәктәбебеҙҙә берҙәм форма кейеү ҡаралған, уныһы бик уңайлы, әлбиттә. Алмашҡа бер-ике күлдәк һәм блуза алһаң, етеп ҡала. Минең өсөн иң ауыры - аяҡ кейеме эҙләү. Көнө буйы мәктәптә булған баланың аяғы тирләмәһен өсөн сифатлы аяҡ кейеме алырға кәрәк. Ләкин хаҡына торошло түгел хәҙер әйбер: ҡыйбатын алһаң да сифатһыҙ булырға мөмкин. Шуға күрә бер нисә аяҡ кейеме алам да, аҙна һайын алмаштырып, йыуып-таҙалап торам. Тағы ла физкультура дәресе өсөн мотлаҡ аҡ табанлы кроссовки алып йөрөүҙе талап итәләр. Минең дә, мәктәптең дә талаптарына тура килерлек спорт аяҡ кейеме табыуы шулай уҡ еңел түгел.

Канцелярия әйберҙәренә килгәндә, мин уҡыу йылы бөтмәҫ элек үк киләһе йылға әҙләп әйберҙәр ала башлайым. Мәҫәлән, эргәләге "Фикс прайс" магазинына өйгә кәрәк-яраҡ алырға ингәндә мотлаҡ 10-ар шаҡмаҡ, буй һәм ҡыя дәфтәр, ручка йә ҡәләм тотоп сығам. Башҡа ваҡ әйберҙәрҙе лә шулай йыям. Ә ул магазинға аҙнаһына бер булһа ла ингәнде иҫәпкә алғанда, 1 сентябргә кәрәкле канцелярия тауарҙар әҙерләнеп бөтә тиерлек. Әлбиттә, яҙыуға яйлы булһын өсөн ҡулдарына тура килгән ручка, сифатлы төҫлө ҡәләм һәм буяу, юйғыс һәм башҡа әйберҙәрҙе махсуслаштырылған магазиндарҙан да һатып алам. Үҙем тотоп ҡарап алмаған әйберҙе үҙһенмәгәс, интернеттан заказ биреп алдырмайым.

Минең өсөн балаларға сифатлы, еңел, ҡулай, бөтә яҡтан да уңайлы мәктәп сумкаһы табыу иң ауыры булды. Иртән мәктәпкә барған балаларға иғтибар иткәнегеҙ бармы? Сумка ауырлығынан билдәренән бөгөлөп, танауҙары ергә тиклем тейеп тиерлек бара. Хәҙер бер дәрес өсөн әллә нисә китап һәм махсус дәфтәр, уға ҡушып ябай дәфтәр, шулай уҡ башҡа кәрәк-ярағын һалырға кәрәк. Ул сумканың ауырлығы иҫ киткес. Баланың һаулығына зарар килеүе көн кеүек асыҡ. Сит илдә йәшәгән танышым балаларҙың мәктәпкә бәләкәй генә тәгәрмәсле мәктәп сумкаһы менән йөрөүҙәрен әйткәйне, ҡыҙғаныҫҡа күрә, бында ундайҙы таба алманым. Күтәреп түгел, һөйрәтеп йөрөтөү күпкә яҡшыраҡ булыр ине.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Яңы уҡыу йылында Башҡортостан мәктәптәрендә "Канатлан!" республика белем биреү проектының "Сәләмәт йылмайыу" модуле буйынса 30 стоматология кабинеты асыла. Был хаҡта республика етәксеһе Радий Хәбиров белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, 2022 йылда теш табиптары өсөн 12 кабинет йыһазландырылған. Республика мәктәптәрендә барлығы 214 стоматология кабинеты бар, шуларҙың 80-е "Канатлан!" проекты буйынса асылған. Уларҙа 223 кеше эшләй. 2022-2023 уҡыу йылында 130 меңгә яҡын бала һәм 5 мең уҡытыусы теш табиптарында булған.

✓Үтеп барған аҙнала "Башнефть" заправкаларында бензинға хаҡтар бер йәйҙә ун беренсе тапҡыр ҡиммәтләнде. АИ-100-К5 маркалы бензин - 62,65 һум, ATUM-95 өсөн 52,95 һум түләргә кәрәк, АИ-92-нең хаҡы үҙгәрмәгән - 48,80, ATUM-92 "Класс 5" 30 тингә ҡыйбатланып, 49,90 һум билдәһендә туҡтаған, дизель яғыулығының хаҡы шул килеш ҡалған - 58,20 һум. Башҡортостандың Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығында быны яғыулыҡтың ошо төрөнә биржа хаҡтарының артыуы менән бәйләйҙәр.

✓Башҡортостанда Сумо федерацияһы ойошторолдо. Башҡортостан Республикаһының Сумо федерацияһы президенты итеп Руслан Зарипов тәғәйенләнде. Ошо көндәрҙә ул Мәскәүҙә Рәсәйҙең Сумо федерацияһы президенты Роман Илиев һәм әлеге ойошманың беренсе вице-президенты Геннадий Калеткин менән осрашты. Улар Башҡортостанда япон көрәшен, ә хәҙер инде донъялағы мауыҡтырғыс, көслө һәм популяр спорт төрөн - сумоны үҫтереү мәсьәләләрен тикшерҙе.

✓"Евразиадаға ҡаршы" милли һәм олимпия уйындарына инмәгән спорт төрҙәре буйынса халыҡ-ара ярыштарҙы асыу тантанаһында республика спорт мәктәптәре етәкселәренә "ГАЗель" машинаһы асҡыстары тапшырылды. Бындай бәхет Өфөнөң 34-се спорт мәктәбенә, Башҡортостандың тау саңғыһы спорты һәм сноуборд буйынса олимпия резервы спорт мәктәбенә, Салауат һәм Иглин райондарының балалар һәм үҫмерҙәр спорт мәктәптәренә, шулай уҡ республиканың байдаркала һәм каноэла ишеү буйынса олимпия резервындағы мәктәбенә йылмайҙы.

ҠЫҪҠАСА

# БЕРЕНСЕ ПРЕЗИДЕНТҠА ҺӘЙКӘЛ

**Беренсе Президентҡа һәйкәл ҡуйыу экспертиза тарафынан хупланған. Дүрт метр бейеклектәге һәйкәлде баш ҡаланың Ленин исемендәге паркында ике фонтан араһында, Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай бинаһы алдында ҡуйыу планлаштырыла.** Документта яҙылыуынса, Мортаза Рәхимовтың мемориаль комплексы Ленин исемендәге паркта урынлашҡан туғандар ҡәбере, Шәһит Хоҙайбирҙин һәм Мәжит Ғафури ҡәберҙәре, Александр Матросов һәйкәле кеүек мәҙәни мирас объекттарын тулыландырасаҡ. "М.Ғ. Рәхимовтың бронза һәйкәле майҙан уртаһында ике баҫҡыслы гранит постаментта урынлашасаҡ. Уның артында монументаль ҡоролма, Башҡортостан картаһы һәм Рәхимов ҡабул иткән Конституцияның тәүге бите ҡуйыласаҡ, Мансур граниты башҡорт биҙәктәре менән биҙәләсәк", - тигән аңлатма бирелә һәйкәлдең проектында.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөләге Аксаков исемендәге баҡсаны төҙөкләндереү барышы менән танышты.** Республика етәксеһе билдәләүенсә, йәмәғәт киңлеге баш ҡалалағы башҡа ял итеү урындарынан күпкә айырылып торасаҡ. "Бынан алда эштән Совет майҙанына Шайморатов генералға һәйкәл ҡуйыуҙы ҡарарға ҡаса инем. Ә хәҙер эштән Аксаков исемендәге баҡсалағы төҙөкләндереү эштәре менән танышыу өсөн ҡасам. Бында барыһы ла һәйбәт. Бөтә биләмәне тәртипкә килтерәбеҙ. Был парк Башҡортостанда беҙ төҙөкләндергән башҡа ял итеү урындарынан айырылып торасаҡ - ул бик уңайлы һәм йәмле буласаҡ. Аксаков исемендәге баҡса беҙҙең халыҡҡа оҡшар тип ышанам", - тип яҙҙы социаль селтәрҙә Радий Хәбиров. Ул шулай уҡ баҡсаны асыу тантанаһы 11 октябрҙә - Республика көнөндә үтәсәге хаҡында яҙҙы.

✓ **Роспотребнадзорҙың республика буйынса идаралығының тышҡы коммуникациялар бүлеге начальнигы Регина Аҡмалова мәктәп ашханаларында порциялар нормаһы тураһында һөйләне.** Улар баланың йәшенә ҡарап иҫәпләнә. Әйтәйек, 7-12 йәшлек баланың иртәнге ашы - 500 (төшкө аш - 700), 12 йәштән өлкәнерәктәрҙең 550 грамм (төшкө аш - 800) булырға тейеш. 7-12 йәшлек балалар өсөн тәүлеклек энергетик ҡиммәт - 2350 ккал, 12 йәштәгеләр һәм унан өлкәнерәктәр өсөн - 2720 ккал. Яңыраҡ "Башинформ" яңы уҡыу йылында уҡыусылар өсөн ике яңы меню әҙерләүҙәре хаҡында яҙғайны. Унда дөрөҫ туҡланыу тәртибе, нутрициологтар һәм диетологтарҙың кәңәштәре иҫәпкә алынған. Уҡыусыларға алма чипсылары, томат соусындағы фрикаделькалар, һыйыр итенән купаттар, балыҡ фишболдары тәҡдим ителәсәк.

ТӨРЛӨҺӨНӨН

# УЛАР - ШАЙМОРАТОВСЫЛАР!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә генерал Шайморатов ордены кавалерҙары клубын ойоштороуҙары тураһында хәбәр итте.**

Уның билдәләүенсә, клуб советы составына генерал Шайморатов ордены кавалерҙары индерелә, улар үҫеп килгән быуын араһында ватансылыҡ эшен башҡарырға, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың һәм уларҙың ғаиләләренең мәнфәғәттәрен яҡларға тейеш. "Өфөлә икенсе тапҡыр "Геройҙар вақыты" Бөтә Рәсәй патриотик йырҙар конкурсы уҙҙы. Ул Рәсәй Геройы Миңлеғәле Шайморатовтың тыуған көнөнә арналды. Конкурсанттар йылдан-йыл арта, ә сара Рәсәйҙең мәҙәни тормошонда сағыу ваҡиғаларҙың береһенә әүерелә бара, - тине Радий Хәбиров. - Ошо көндән алып генерал Шайморатов һәйкәле янында почётлы ҡарауыл һаҡта тора. Әлеге ҡарарҙы ҡабул итер алдынан оҙаҡ уйланыҡ. Был - һәләк булған геройҙарға һәм хәҙерге көндә хәрби бурысын үтәгәндәргә хөрмәт билдәһе".

# ИКМӘК БУЛА!

**Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостанда уңыш йыйыу барышы хаҡында һөйләне.**

Уның һүҙҙәренсә, 1 миллион 160 мең гектарҙан ашыу майҙанда иген һәм ҡуҙаҡлы культуралар сабылған, был пландың 68 процентын тәшкил итә. Тулайым йыйым - 2 миллион 250 мең тонна иген. Гектарынан уртаса уңыш - 19,6 центнер. Ужым культураларын йыйыу тамамланған. Бынан тыш, 32 район аграрийҙары рапс, гәрсис һәм етен йыя башлаған. Дөйөм алғанда, 40 мең гектар майҙан сабылған, яҡынса 9 процентында һуғылған (35,4 мең гектар), 30 мең тонна майлы орлоҡ һуғып алынған, гектарынан уңыш 8,5 центнер тәшкил иткән. Аграрийҙар тупаҫ һәм һутлы мал аҙығы әҙерләү эшенә тотонған. Бөгөнгә пландың 59 проценты үтәлгән. Республикала ужым культураларын сәсеү, ерҙе эшкәртеү һәм техниканы шәкәр сөгөлдөрөн йыйыуға әҙерләү дауам итә. Ужым культуралары яҡынса 160 мең гектар майҙанда, йәғни пландың 25 процентынан ашыуында сәселгән. Бынан алдараҡ Башҡортостанда ужым культураларын етештереүҙе ике тапҡырға арттырырға йыйыныуҙары хәбәр ителгәйне.

# РЕЦЕПТЫ КЕМ ЯҘА?

**Башҡортостанда хроник сирле кешеләр өсөн льготалы дарыуҙарға рецептарҙы табиптар ғына түгел, фельдшерҙар ҙа яҙырға хоҡуҡлы.**

Был хаҡта Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашконың Өфөгә сәфәренә йомғаҡ яһап, Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республиканың Һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Гөлнара Зиннурова хәбәр итте. "Был препаратты алыу ваҡытын күпкә экономиялай, иң мөһиме - табипка врач эшмәкәрлеген алып барыу ваҡытын бушата", - тип билдәләне министр урынбаҫары. Республиканың табиптар, урта медицина персоналы һәм медицина булмаған хеҙмәткәрҙәр араһында бурыстарҙы ҡайтанан бүлеү тәжрибәһе менән башҡа төбәктәрҙән килгән коллегалар беренсел медицина-санитар ярҙамды үҫтереүҙең көнүҙәк мәсьәләләре буйынса бөтә Рәсәй кәңәшмәһе барышында танышты. Унда ҡатнашыусылар страховка компаниялары вәкилдәренең, ирекмәндәрҙең һәм студент-медиктарҙың эшкә йәлеп ителеүен билдәләне. "Коллегалар һәр белгестең эш тәртибенең аныҡ алгоритмы булырға тейешлеге тураһында фекер алышты. Был, һис шикһеҙ, медицина ярҙамы күрһәтеү ваҡытын экономиялай һәм медицина ярҙамы арттыра. Михаил Альбертович был сараны бик юғары баһаланы. Бөтә коллегаларға рәхмәт", - тип билдәләне Гөлнара Зиннурова.

# ЭШҠЫУАР ӘСӘ

**"Кесе һәм урта эшҡыуарлыҡ һәм шәхси эшҡыуарлыҡ башланғысына булышлыҡ итеү" милли проекты сиктәрендә 2023 йылдың 2 октябренән 6 октябренә тиклем Башҡортостанда "Эшҡыуар әсә" бушлай уҡытыу программаһы үтәсәк, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтендә.**

Проектта ҡатнашыусылар бизнес башлау йәки булған проектты киңәйтеү буйынса комплекслы белем аласаҡ, шулай уҡ буласаҡ партнерҙар һәм ҡатын-ҡыҙҙар бизнесына булышлыҡ итеү буйынса ғәмәлдәге саралар менән танышасаҡ. Проектта йөклөлөк һәм бала табыу буйынса отпуск алған йәки балиғ булмаған балалар тәрбиәләгән ҡатын-ҡыҙҙар ҡатнаша ала. Эшҡыуарлыҡ тәжрибәһе талап ителмәй. Уҡытыу бизнес мөхитенә сумыу һәм остазлыҡ ярҙамы менән күп көнлөк интенсив уҡытыу форматында үтәсәк. Ҡатнашыусылар үҙ проекты буйынса бизнес-план әҙерләй, ә финалда уны эксперттар жюриһы алдында яҡлаясаҡ. Улар иҡтисади, техник-иҡтисади мөмкинлектәренә, үҙенсәлегенә һәм социаль әһәмиәтенә ҡарап баһаланасаҡ. Иң яҡшы проект авторҙары уларҙы тормошҡа ашырыу өсөн - 100 мең һум, ә федераль этаптың ике еңеүсеһе 1 миллион һум аҡса аласаҡ.

Программала ҡатнашыу өсөн 2023 йылдың 22 сентябренә тиклем мамапредприниматель.рф сайтына инеп, ғариза бирергә кәрәк. Проект Рәсәйҙә 10 йыл дауамында тормошҡа ашырыла. Ошо ваҡыт эсендә унда 7000-гә яҡын ҡатын-ҡыҙ ҡатнашты, шуларҙың 247-һе конкурс еңеүсеһе тип танылды. Программа сиктәрендә Рәсәйҙең 73 төбәгендә 250-нән ашыу тренинг үткәрелгән.

# ПЛАСТИК ТӨРГӘК ТЫЙЫЛА!

**Рәсәйҙә 2024 йылдан башлап пластик төргәктәрҙең биш төрө тыйылыуы ихтимал, ә 2030 йылға тыйылған пластик һаны 20-гә тиклем артыуы ихтимал. Улар хаҡында федераль проектта яҙылған һәм Рәсәй тәбиғәтте һаҡлау операторы (РЭО) презентацияһында ла сағыла.**

"Беҙ экологик яҡтан таҙа, эшкәртелә алған төргәктәргә этаплы, системалы күсеү яҡлыбыҙ, тимәк, ул полигондарҙы тултырмаясаҡ", - тип билдәләне Рәсәй тәбиғәтте һаҡлау операторы етәксеһе Денис Буцаев. Уның әйтеүенсә, кәрәкле ҡеүәттәр барлыҡҡа килһен өсөн йәйләп үҙгәртергә кәрәк. Ул бизнеска инновацияларға әҙерләнергә лә мөмкинлек бирәсәк.

Үҙгәрештәрҙең төп маҡсаты - эшкәртеүе ауыр йәки мөмкин түгел һәм экологик яҡтан таҙа булмаған контейнерҙарҙан баш тартыу. Уны сүп-сарҙын дөйөм күләменән айырыу ауыр. Бер юлы бер нисә материалдан торған материалды бер-береһенән айырыу мөмкин түгел тиерлек.

Башта традицион булмаған ПЭТ шешәләрен ҡулланыуҙы сикләү (аҡ, асыҡ зәңгәр, йәшел һәм көрәндән башҡа), шулай уҡ йоҡа пленкаhis айырылмаған пленкаларҙы тукҡатыу тәҡдим ителә. Был материал этикеткала, йәшелсәләр өсөн селтәрле пакеттарҙа, кетчуп һәм ҡәһүә капсулалары өсөн ҡулланыла.

Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы төргәктәрҙең дүрт төрөн сикләргә тәҡдим итә: улар күп төҫлө "кислоталы" ПЭТ шешәләре, йоҡа пленкалар, шулай уҡ ПВХ этикеткалы контейнерҙар һәм иремәй торған елемдән эшләнгән төргәктәр.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө ҡалаһы буйынса ЮХХДИ идаралығы бүлеге хеҙмәткәрҙәре юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләре өлкәһендәге административ хоҡуҡ боҙоуҙарҙы асыҡлауға йүнәлтелгән рейдтар барышында 700-ҙән ашыу автоһәүәҫкәрҙе тикшергән. Тикшереүҙәр барышында 113 хоҡуҡ боҙоу осрағы теркәлгән. Иҫерек килеш руль артына ултырған 9 водитель ҡулға алынған, тип хәбәр итәләр ведомствонан.

✓Өфөлә әле ремонт барған Шаҡша күперендә ҡаланан сығыу өсөн өҫтәмә һыҙат асылды. Әлегә эшселәр күперҙең өҫкө ҡатламын, һаҡлаусы ҡоймаларҙы алған, күпергә тиклем ике яҡтан да юлға ҡом түшәлгән. Күперҙән йөк автомобилдәренә үтеү тыйылған. Төҙөлөш-монтажлау эштәре 2025 йылдың 28 февраленә тамамланасаҡ. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Ҡаризел йылғаһы аша "Князево" кисеүендә паром 23 октябргә тиклем эшләйәсәк.

✓Өфө хакимиәте эттәр менән йөрөү өсөн махсус майҙансыҡтар билдәләне. Унда Архитектор Кәлимуллин, 1, Валерий Лисунов, 10/1, Яр буйы 45, Октябрь проспекты 106/3, Блюхер, 1 йорттары эргәһендәге майҙансыҡтар, "Өфө йүкәләре" сәләмәтлек һуҡмағы территорияһы, Иван Якутов исемендәге, Нефтехимиктар, "1 Май" парктары, шулай уҡ эт тотоусыларҙың шәхси майҙандары ингән. Район башлыҡтарына был урындарҙы махсуслаштырыу өсөн саралар күрергә ҡушылған.

✓2 сентябрҙә Өфөлә "Һөт иле" фестивале ойошторола, унда һөт ризыҡтары йәрминкәһе эшләй. Бынан тыш, "Сыр кибете"ндә республиканың төрлө район-ҡалаларынан 13 етештереүсенең продукцияһын һатып алырға мөмкин. Әйткәндәй, бейә һөтөнән эшләнгән эсемлектәрҙе яратыусылар өсөн "Ҡымыҙлы бар" эшләй. Ғөмүмән, Өфөлә ғаилә фестивалендә 40-тан ашыу һөт һәм һөт ризыҡтарын етештереүсе ҡатнаша. Быйыл "Һөт иле" фестивале тәүгә яңы майҙансыҡта - Дуҫлыҡ монументы эргәһендәге Ағиҙел йылғаһы буйында ойошторола.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Китап һөйөүсе балалар, Башҡортостан баш ҡалаһының тарихы һәм географияһы, архитектура ҡомартҡылары, Өфөгә бәйле ҡыҙыҡлы факттар хаҡындағы белемдәрен күрһәтеп, еңеүсе исемен алырға ынтыласаҡ.***



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



## ЮЛ АСЫЛҺА, КҮҢЕЛ ДӘ АСЫЛА

**31 августан Колгуевская урамынан транспорт хәрәкәтен сикләү туҡтатылды.**

Был урам аша 22 майҙан бирле автомобилдәр менән йөрөп булмай ине, сөнки ҡаланың көньяҡ районддары өсөн бик мөһим булған инфраструктура проекты - ҙур һыу үткәргес төҙөләшөнөң бер өлөшө тап ошо урында башҡарылырға тейеш ине. Подряд ойошмаһы яңы уҡыу йылы башланғансы планлаштырылған эштәрен ваҡытында тамамланы. "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проекты сиктәрендә башҡарылған эштәр һөҙөмтәһендә баш ҡалабыҙҙың Дим һәм Затон биҫтәләрендә яҡын киләсәктә төҙөләсәк торлаҡ микрорайондарында йәшәүселәр эсәр һыуға ҡытлыҡ кисермәйәсәк.

## ЙҮГЕРЕРГӘ ЯРАТАҺЫҢМЫ?

**3 сентябрҙә баш ҡалабыҙҙа IX Халыҡ-ара Өфө марафоны уҙғарыласаҡ. Ошо спорт байрамында бөтөн Рәсәйҙән 7 меңләп профессиональ спортсы һәм йүгереүсе, скандинав йөрөшө һәм роллер спорты менән мауығыусылар ҡатнашырға теләк белдергән.**

Һәр кем, йәшенә һәм теләгенә ярашлы, 2 км, 5 км, 21,1 км һәм 42,2 километрлыҡ, йәғни тулы марафон дистанцияһын һайлай ала. Балаларға 50 метрҙан 400 метрға тиклем булған уҙыштарҙа ҡатнашыу тәҡдим ителә. Спидскейтинг тип нарыҡланған спорт төрөндә тиҙ йөрөшлө роллерҙарҙа 10 км дистанцияла уҙыш уҙғарыласаҡ. Һәр ҡатнашыусыға старт пакеты тапшырыла: унда фирма футболкаһы һәм бағыусыларҙан бүләктәр була, финишҡа килеп еткәндәргә - эксклюзив миҙал, ә еңеүселәргә бүләктәр һәм призлар тапшырыласаҡ. Халыҡ-ара марафон сиктәрендә "#ЙүгерәмЯрҙам итәм" тип аталған хәйриә акцияһы ойошторола, уны "Эшлә!" фандрайзинг платформаһы уҙғара: теләгән кеше ниндәйҙер бер дистанцияны үҙе булдыра алғансы йүгереп уҙғандан һуң шәхси хәйриә ярҙамын күрһәтә ала. Әлеге көндә 805 мең һум аҡса йыйылған да инде.

"Халыҡ-ара Өфө марафоны - Өфө халҡының һәм ҡала ҡунаҡтарының яратҡан спорт байрамы, - ти марафон һәм Bashrun уҙыштары серияһы директоры Дмитрий Бабин. - Беҙ ҡатнашыусыларға туғыҙынсы мәртәбә Рәсәйҙә иң унайлы һаналған сертификацияллы трасса буйлап йүгереп үтергә тәҡдим итәбеҙ. Ул ҡаланың тарихи үҙәгендәге үтә матур маршрутты үтеп, ләззәт кисерергә мөмкинлек бирә. Ҡатнашыусыларҙы һәм көйәрмәндәрҙе концерт программаһы көтә, конкурстарҙа ҡатнашып, призлар алырға ла була".

## АҠЫЛЫҢ БУЛҺА, КИТАП УҠЫ!

**5 сентябрҙә Өфө тарихы музейында "Мин ошо ҡалала йәшәйем" тигән квиз (интеллектуаль ярыш) уҙғарыласаҡ.**

Бәктиһәң, ошондай сара баш ҡалабыҙҙың Үҙәкләштерелгән балалар китапханалары системаһы тарафынан китап уҡырға яратыусы балалар араһында йыл һайын уҙғарыла икән. Быйыл ул "Йәй һәм китап" конкурсы сиктәрендә 29-сы тапҡыр ойошторола.

- Быйыл конкурс Өфө ҡалаһының 450 йыллығына арнала. Финалға сығыусы командалар, конкурс шарттарына ярашлы, тыуған ҡалабыҙ хаҡында китаптар уҡып сығырға тейеш булды, бәләкәсерәктәр эссе яҙып тапшырҙа, олораҡтары "Һинең китапханаң эргәндә" тигән темаға видеофильм төшөрҙө. Финалда Өфө районддары китапханалары уҙғарған квизда еңеүсе командалар ҡатнашасаҡ, - тип хәбәр итте конкурсты ойоштороусылар.

Финалда 6-шар уйынсынан торған 7 команда ҡатнаша, ул 5 турҙан торасаҡ. Китап һөйөүсе балалар, Башҡортостан баш ҡалаһының тарихы һәм географияһы, яҙыусылары һәм музыканттары, архитектура ҡомартҡылары, Өфөгә бәйле башҡа ҡыҙыҡлы факттар һәм ваҡиғалар хаҡындағы белемдәрен күрһәтеп, ошо ярыштың еңеүсеһе исемен алырға ынтыласаҡ.

## ТӘМЛЕТАМАҠТАР ЙЫЙЫЛДЫ

**25 - 27 августа Өфөлә ҡала рестораннарының "Ашау Фест" ("Есть Фест") тип аталған IV фестивале уҙғарылды.**

Сараны ойоштороусы Сергей Белкин ошо гастрономия байрамы хаҡында ғорурланып бәйән итте: "Беҙ Волга буйында ғына түгел, Рәсәй кимәлендә иң күләмле гастрономик фестиваль уҙғарҙыҡ: унда 101 ресторан, 27 партнер һәм 12 фермер хужалығы ҡатнашты. Шул уҡ ваҡытта ҡунаҡтар һаны буйынса ла яңы рекорд ҡуйҙыҡ. Быйыл фестивалгә килеүселәрҙең урындағы етештереүселәргә ҡарата иғтибары артыуын күрҙек. Артабан ошо йүнәлеште үҫтерергә ниәт итәбеҙ, быныһ өсөн киләһе йылда фермерҙар урамын мотлаҡ кинәйтәсәкбеҙ, шул саҡта ҡатнашырға теләк белдереүселәрҙең барыһына ла урын етәсәк".

"Ростелеком"дың Башҡортостандағы ойошмаһы йыл һайын фестивалдең партнеры ролен үтәй. Ул ҡунаҡтарға һәм ҡатнашыусыларға тиҙлекле интернет менән файҙаланыу мөмкинлеген бирә. "Ризыҡ" ("Еда") телеканалының шеф-повары Владимир Павлов байрамдың махсус ҡунағы булды, ул Wink фирма тирмәһендә мастер-класс уҙғарҙы. Сегмент етәкселәре Сергей Чирков менән Юлия Аксенова киске ашҡа төрлө ризыҡтар әҙерләне.

АЛДАЙҘАР!

## ЯҢЫСА...

**Өфө ҡала округы хакимиәтендә Рәсәй Эске эштәр министрлығы Өфө буйынса идаралығының штаб начальнигы, эске хеҙмәт полковнигы Артур Хафизов сығыш яһаны һәм телефон аша алдашыусыларға ҡаршы көрәш, халыҡ араһында алып барылған иҫкәртеү саралары тураһында һөйләне.**

Билдәләнеүенсә, Өфөлә һуңғы аҙнала ғына 75 дистанцион алдашыу осрағында 15 миллион һум аҡса урланыуы теркәлгән. Артур Хафизов шулай уҡ яңы алдашыу осрағы тураһында ла һөйләне. Алдашыусылар хәҙер банк йә полиция хеҙмәткәрҙәре исеменән түгел, ә алдаҡ тоҙағына ҡаптырылырға тейешле кешенең эш урынынан, уның начальнигы исеменән шылтырата. Улар тәүҙә начальниктың исем-шәрифтәрен атай. Шунан стандарт схема буйынса алдау башлана: йәнәһе, кемдәрҙер ул кеше исеменә банкта кредит алырға маташа. Билдәһеҙ әҙәмдәрҙең был алдығын иҫкәртеү өсөн кисекмәҫтән уның үҙенә кредит алырға һәм аҡсаны күрһәтелгән иҫәпкә күсерергә кәрәк буласаҡ. Оператив штаб начальнигы Сергей Кожевников осрашыуҙа ҡатнашыусыларға: "Һеҙҙе нисек кенә өгөтләмәнендәр һәм ҡурҡытмаһындар, таныш булмаған номерҙан шылтыратыусылар менән бәйләнешкә сыҡмағыҙ, улар менән диалогҡа инмәгеҙ", - тине.

**Әйткәндәй, мутлашыусыларҙың тағы бер сираттағы схемаһы шунан ғибәрәт: улар вирусллы документтар ебәрә.**

- Бухгалтерҙар, секретарҙар, финанс, һалым һәм башҡа иҫәп-хисап белгестәре йыш ҡына интернетта документ шаблондары эҙләй. Мутлашыусылар дәүләт ведомстволарының һәм билдәле белешмәхоҡуҡ системаларының ялған сайттарын булдыра һәм унда зарарланған документтар һала. Шуның менән бергә хакерҙар интернет селтәрендә тәҡдим ителгән исемлектә тәүге юлдарҙың береһен биләргә мөмкинлек биргән SEO-poisoning алымын ҡуллана.

- Ҡулланыусы документты күсереп ала, шунан һуң уның компьютерында ситтән тороп тоташыу программаһы эшләй башлай. Программа ярҙамында хакерҙар компанияның килешеүҙәрендә, мәсәләп, подрядсылар йәки тәьмин итеүселәр менән төҙөлгән килешеүҙәрҙә, банк реквизиттарын үҙгәртә ала. Аҡса алырға тейешле дәүләт ведомствоһы мәғлүмәттәре урынына үҙҙәренекен күрһәтә.

- Ҡағыҙҙа булараҡ, компания хеҙмәткәрҙәре вируслы программаны тиҙ генә аңғармай. Ҡайһы берҙә мутлашыусылар эш компьютерҙарына тоташыуҙы туҡтата һәм уны тергеҙеү өсөн аҡса һорай.

Быға нисек ҡаршы торорға? Антивирус ҡуйығыҙ һәм уны даими яңыртып торогоҙ; автоматик рәүештә төрлө программалар ҡуйыуға һәм эшләтеп ебәреүгә сик ҡуйығыҙ; сайт адресына иғтибар итегеҙ - ялған сайт рәсми сайттан бер символ менән генә айырылырға мөмкин. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: дәүләт органдарының рәсми сайттары зәңгәр түңәрәк менән күрһәтелә; әгәр ойошманың адресы күрһәтмәһендә йоҙаҡ формаһында хәүефһеҙ тоташыу билдәһе булмаһа, сайт менән эшләгәндә һаҡ булығыҙ.

- Документты күсереп алғанда уның форматына иғтибар итегеҙ. Түбәндәге форматтар хәүефһеҙ тип иҫәпләнә: pdf, docx, xlsx, jpg, png.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеген онотмағыҙ.**

### Теш һыҙлаһа

Табипҡа мөрәжәғәт иткәнсе теш һыҙлауына түҙеп тора алмаҫ булһағыҙ, түбәндәге халыҡ дауаһы ысулдарын ҡулланып ҡарарға була:

❖ 30 грамм һитәне (прополис) 200 мл араҡыла 7-10 көн төнәтергә. Иләп кенә һеҙеп, ҡара быяла һауытҡа ҡойоп алырға. Теш һыҙлағанда ошо төнәтмәгә мамыҡ манып, ауыртҡан урынға баҫырға.

❖ 100 грамм ваҡланған һарымһаҡҡа 0,5 л араҡы ҡойоп, бүлмә температураһында ҡараңғы урында 2 аҙна тоторға, болғатып торорға, шунан 2-3 көн тондорорға һәм күп ҡатлы марля аша һөҙөргә. Теш һыҙлағанда төнәтмәгә 1:1 нисбәтендә йылы һыу ҡушып, ауыҙҙы сайҡатырға.

❖ Камфора спиртына мамыҡ манып ауыртҡан тешкә баҫырға. Шулай уҡ уны һыҙлаған тештең ҡаҙнаһына ла һөртергә.

### Һытҡы сыҡһа

❖ 3 ҡалаҡ ваҡланған ҡыярға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 2-3 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм ҡалғанын һығып алырға. 1 балғалаҡ бал ҡушырға. Ошо шыйыҡсаға мамыҡ мансып, йыуынғандан һуң битте һөртөргә.

❖ Майланып торған бит тиреһенә сыҡҡан һытҡыны бөтөрөүҙә алоэ яҡшы ярҙам итә. Алдан ҡараңғы, һалҡын урында тотолған алоэ япрағын бутҡа итеп иҙеп, 1:5 нисбәтендә ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә, 2-3 минут ҡайнатып алып, һөҙөргә.

❖ Үҫмерҙең боҙолған бит тиреһен һәм һытҡы сыҡҡан тирене шайтан таяғы (татарник колючий) үләне һуты менән һөртөргә һәм бер үк ваҡытта мотлаҡ көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң 1-әр балғалаҡ һутын эсергә.

❖ Майлы тирегә көнөнә 2-3 тапҡыр 1-әр балғалаҡ бал һәм календула төнәтмәһен 1 стакан ҡайнатылған йылы һыуға ҡушып һөртөргә кәрәк.

❖ 1 өлөш яңы ҡурай еләге япрағы һутына 4 өлөш аҡ май йәки вазелин ҡушып май әҙерләргә һәм биткә көнөнә 1 тапҡыр һөртөргә.

**Гәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ Тағы нимә бирҙе был телевизорһыҙ бер йыл? Донъяға бөтөнләй икенсе төрлө ҡарай башлайһың икән дә. Күберәк эшләргә, яҙырға тырышаһың. Башҡа төрлө уйҙар, фекерҙәр йыйышыраҡ килә.



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҡауҙы**
**(Черный аист)**



Ҡауҙылар - илдең һәм донъяның иң һирәк ҡоштары. Эре ҡош, аяҡтары һәм муйындары оҙон, һыу буйында йәшәй. Селәндән айырмалы рәүештә, муйынын гел тура тотоп йөрөй. Йылы климатты ярата, Белоруссиянан алып Приморьеға тиклем осрай. Ҡауҙылар ғаиләһендә 17 төр, шуларҙың 3-һе - Рәсәйҙә, беҙҙәң республикала 1 төрө бар. Өлкән ата һәм инә ҡоштарҙың арҡаһы йәшкелт ҡара, ҡойроҡ аҫты һоро, ҡорһаҡ аҫты аҡ. Суҡышы, тәпәйҙәре, күҙе тирәһе ҡыҙыл. Йәш ҡоштар һоро төҫтә, ҡаурыйҙары аҡһыл. Тәненең оҙонлоғо 90-100 см, ҡанаттарын йәйһә, 185-205 см-ға етә. Ҡош туйы ваҡытында ғына тауыш бирә, ул төрлө өндәр йыйылмаһынан тора.

Республикала Архангел, Бөрйән, Мәләүез райондарында (Нөгөш һәм Өрәк йылғалары араһында), Башҡорт ҡурсаулығы һәм Шүлгәнташ ҡурсаулығында оя ҡора. Һуңғы йылдарҙа Һәүәнәк йылғаһы (Белорет районы) буйында ла күренгән.

Оя ҡорор өсөн урмандың киң яланлы, һаҙлыҡлы йылға буйҙарын һайлай. Бик һаҡ һәм йәшерен ҡош, кеше аяғы баҫмаған урмандарҙы ярата. Эре ботаҡтарҙа, ҡаяларҙа оя ҡора. Ояның эсенә үлән, япраҡ, ҡамыш, мал йөнөн түшәй. 3-5 йомортҡа һала. Бәпкәләрҙе ата ҡош менән инә ҡош сиратлап баҫып сығара. Балыҡ, һирәгерәк кимереүселәр менән туклана, уларҙы һаҙлыҡтарҙан, йылғаның һайыраҡ урынДарынан, күлдәрҙән тота. Кеше аяғы баҫмаған урмандарҙың һирәгәйеүе, ағастарҙы күпләп ҡырҡыу, һаҙлыҡтарҙың кибеүе һөҙөмтәһендә ҡауҙыларҙың һаны йылдан-йыл кәмей. Башҡортостан, Рәсәй, Халыҡ-ара Ҡыҙыл китаптарына ингән.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ИШАРА

**Ирекһеҙҙән килеп сыҡты был тәжрибә. Бер йыл телевизорһыҙ йәшәнек. 9 Майҙағы хәрби парадты ҡарағандан һуң егерме йыл һин дә мин эшләп ултырған "йәшнигебеҙ" ҡапыл һүнде лә ҡуйҙы. Япон техникаһы булһа ла, уның да эшләү ваҡытының нормаһы үтәлгәндер, күрәһең. Төҙәттереп тә маташманыҡ, яңыһын да алманыҡ. Баҡса миҙгеле башланғас, эштән буш ваҡытта шунда ашыҡтыҡ. Инде көҙ етеүгә, телевизорһыҙ йәшәүгә өйрәнеп тә бөткәйнек. Уның кәрәген дә тойманыҡ. Шулай итеп, хәҙер бер йыл үткәс, ниндәйҙер һығымта яһарға ла мөмкиндер кеүек.**

# ТЕЛЕВИЗОРҺЫҘ БЕР ЙЫЛ,

## йәки Үҙ-үҙеңә ҡайтыу



Ғәҙәттә, эштән ҡайтыу менән аш бүлмәһенә инәһең дә киске ризыҡ әҙерләргә тотонорҙан алда телевизорҙы тоҡандырып ебәрәһең. Яңылыҡтар тыңлайһың. Артабан төрлө тапшырыуҙар бер-берееһен алмаштыра. Сериалдар ҡарай башлаһаң, айырылып булмай, артабан нимә буларын белге килә. Шулай аҙналар, айҙар үтә. Зомбиға әйләнеп, "ҡара йәшник"кә текләп ғүмер уҙа. Ашағанда ла ҡарайһың. Ирең икенсе каналды тоҡандырһа, йән көйә, әрләшеп тә китәһең.

Хәҙер рәхәт. Һәр кем үҙ эше менән була. Ә сериалдарға килгәндә, шуны әйтер инем: һәр берешеҙҙең тормошонан әллә ниндәй сериалдар төшөрөрлөк - яҙмыштар, ғибрәттәр тулып ята. Телевизорҙан эҙләргә лә түгел, эргәлә генә. Бер ҡыҙ Бразилия сериалындағы Марияны йәлләп илап ултыра икән. Ике туған апаһы тегегә нығыраҡ ҡына итеп: "Нинә һин әллә ҡайҙағы Мария өсөн күҙ йәше түгәһең? Әсәйегеҙ Мариянан кәмме ни? Йәшләй генә ирһеҙ ҡалып, икегеҙҙе үстерәм, кеше итәм, тип ниндәй нужа һурпалары эсмәй! Бына кемде йәлләргә кәрәк", - тигәс, теге: "Ысынлап та, апай, ҡалай дөрөҫ әйттең, минең был хаҡта уйлағаным да юҡсы", - тигән. Уйларға кәрәк шул. Ә телевизор беҙҙең өсөн уйлай, хәл итә. Үҙенә буйһондора, уныңса уйларға бойора, үҙебеҙсә фекерләү һәләтенән айыра.

Яңылыҡтарға килгәндә, һуғыш, үлтереш, һуйыш, янғын, һәләкәт, аварияһан башҡа ниндәй яҡшы хәбәр ишетелә? Шуларҙы тыңлап, былай ҙа эштән арып ҡайтҡан, үҙ проблемаларынды нисек хәл итергә белмәгән өҫтөнә әлегеләре йөрәгеңде тотоп ултырырға мәжбүр итә, тен буйы йоҡламай кисереп сығаһың. Яҡшы тигән хәбәрҙәре лә ташҡа үлсәйем инде: бер данлыҡлы футболсы 179 мең һумға алтын телефон алған икән. Был беҙҙең кеүек 15 мең һумға эшләп йөрөгән журналист өсөн шатлыҡмы? Ике йылдан ашыу ашамай-эсмәй йыйһаҡ та ундай телефонды алырға хәлебеҙҙән килмәйәсәк. Кәрәге лә юҡ. Бәйләнеш өсөн мең һумлығы ла ярап ҡала. Йәки бер эстрада мәтрыһның Францияның Ниццаһында тәүлегенә 500 евро түләп ял итеп ятыуын белеү кемгә кәрәк? Меҫкен эш хаҡын тартып-һуҙып ипотека түләргәме, фатирға айлыҡ түләүҙән ҡотолорғамы тип баш ватҡан кешеләрҙе көзекләү генә ләбаһа был яңылыҡ тигәндәре. Ул 500 евроны үҙебеҙҙең һумдарға әйләндерергә лә ҡурҡыныс. Ниндәй номерҙар инде "биш йондоҙло" отелдәрендә? Ниндәй түшәктәрендә ятҡыларҙыр ҙа нимәләр ашаталарҙыр... Билеттарын 5-7-шәр меңгә һатып, бөтә Рәсәй буйлап концерт күрһәтеп, фонограммаға ауыҙ асып-йомоп, халыҡтан - хәйер, дөрөҫ түгел, ябай тамашасы ундай тамашаға йөрөй алмай, олигархтарҙан йыйған аҡсаһын ҡайҙа ҡуйырға белмәгән шоу-бизнес әһелдәре сит илдәрҙә фатирҙар һатып ала, донъя сигенә барып ял итә, ә Башҡортостандыҡылар үҙебеҙҙең "Янғантау"ға ла барып етә алмай...

Беҙ кәрәк яңылыҡты телевизорһыҙ ҙа ишетәбеҙ. Бының өсөн интернет та, радио ла, гәзит тә бар. Мин үҙем, мәҫәлән, төрлө баҫмаларҙы сағыштырып уҡып барам. Ә беҙҙең "Башҡортостан", "Киске Өфө" гәзиттәрендә кәрәгенсә генә, етерлеге генә бирелеп тора. Шөкөр, донъянан артта ҡалған юҡ.

Уҡыу тигәндән, телевизор эшләмәгәне бирле бик күп китаптарҙы ҡарап сығырға тура килде. Ҡарап сығыуҙы биттәрен асыпябыу тип аңларға ярамай. Минең үҙемдең уҡыу алымым бар. Кәйефемә, ваҡытыма ҡарап, төрлө китапты алып, өләшләп уҡырға ятам. Мәҫәлән, Светлана Алексиевичтың "Секонд-хенд ваҡыты" тигән йыйынтығын әллә нисә ай буйына уҡыйым. Уның бер нисә битенән һуң баш ауырта, йөрәк ҡаға башлай. Тотош уҡыу һис мөмкин түгел. Авторҙың ете китабы ла шундай документаль публицистика жанрында яҙылған. Әҫәрҙәре 35 телгә тәржемә ителеп, фильмдар төшөрөлөп, утыҙға яҡын төрлө халыҡ-ара премияға лайыҡ булған китаптарында үткәнебеҙҙең, бөгөнгөбөҙҙөң тарихи дөрөҫлөгө сағыла. Сәстәр үрә торорлоҡ, ҡот осҡос хәҡиҡәт! Шуларҙы уҡығандан һуң телевизорҙан мең иләктән иләп күрһәтелгән йәки шаштырылған, арттырылған ваҡиғалар ҡыуыҡ кеүек кенә булып ҡала...

Тағы нимә бирҙе был телевизорһыҙ бер йыл? Донъяға бөтөнләй икенсе төрлө ҡарай башлайһың икән дә. Күберәк эшләргә, яҙырға тырышаһың. Башҡа төрлө уйҙар, фекерҙәр йыйышыраҡ килә. Ижадҡа көн дә ваҡытты бүлергә форсат та табыла. Яҙғаныңа етдиерәк ҡарайһың. Ниндәйҙер тамаша күрге килһә, театрға, концертҡа бараһың. Яҡташтар, ҡәләмдәштәр, фекерҙәштәр менән аралашаһың. Ваҡытты ҡәҙерләргә өйрәнәһең. Уҡыуҙан арып китһәң, башты ял иттереп, сканвордтар сисеп алаһың. Ул да белем бирә, хәтерҙе яңырта.

Бер ваҡыт билдәле фән докторы менән урамда һөйләшеп киттек. Аҙаҡ телефондарҙы алышырға булып, уның номерын һораным. "Ә мин кеҫә телефонынан файҙаланмайым", - тип аптыратты. Гәжәпләнеүемде күргәс: "Ә нимәгә ул миңә? Урамда һөйләшергә кәрәкмәй. Өйҙә лә, эштә лә стационар аппарат бар. Кеҫә телефонының бөтөнләй кәрәген таппайым, алғаным да булманы", - тине.

Бер уйлаһаң, ниңә гәжәпләнергә? Әле генә аптырайбыҙ, элек йәшәгәнбеҙ ҙәбаһа. Ҡайһы бер замана техникаһына үҙем дә һаман булһа махсус өйрәнмәйем бит. Мәҫәлән, бөтә нәмәне лә ҡулдан яҙам, компьютерҙа йыймайым. Хәйер, быныһы - бөтөнләй икенсе һөйләшеү темаһы.

Шулай итеп, замананан артта ҡалып, тәүтормош кешеләре мәмерйәлә йәшәгән кеүек, телевизор эсендәге сит донъяларҙы өйгә индермәй генә йәшәп ятҡан көн. Үҙ өйөндә, мәмерйәләге һымаҡ. Бәлки, кемдәрҙер өсөн был сәйер тойолор, әммә ошо бер йыл ваҡыт минең үҙ-үҙемә ҡайтыу йылы булды. Ә кеше өсөн үҙ-үҙе, йәне, булмышы менән һыйышып йәшәүҙән дә мөһимерәк нәмә юҡтыр. Тап шул беҙгә йән тыныслығы бирә лә. Ә йәнең тыныс булмаһа, йәшәүҙәре, ай-һай, еңел түгелдер, хатта онотолор өсөн көнө-төнө телевизор ҡараһаң да...

**Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ҺӘМ МИН УЯНЫП КИТТЕМ...



Лев Толстойҙың Кәрәлек буйы башҡорттары менән тығыҙ аралашып йәшәүе хаҡында байтаҡ мәғлүмәттәр бар, улар хаҡында күп яҙылды. Ә бына яҙыусының "Тәүбә итеү" ("Исповедь") тигән фәлсәфәүи яҙмаһын уҡығандан һуң мәшһүр фекер эйәһе тормошоноң әлегәсә асылмаған яҡтары күҙаллана. Унда яҙыусы йәш сағында ҡылған гонаһтары өсөн выжлан ғазабы кисереп, тәрән һыҙлана, йәшәүеһең мәғәнәһеҙлеген аңлап, үҙ-үҙенә ҡул һалыу сигенә тиклем барып етә. Хатта аңғармаҫтан үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙан ҡурҡып, яңғыҙы йоҡлаған бүлмәһенән аяҡ кейеменең бауын тышҡа сығарып ҡуя, мылтыҡ тотоп һунарға йөрөмәй башлай. "Ул йылдарҙы ытырғанып, сирҡанып, йөрәгемде ауырттырып иҫкә алам"... - тип башлана яҙмаларының гонаһтарын иҫкә алған өлөшө. Аҙаҡтан шундай һығымтаға килә: "Артабан үҙ-үҙемде алдап йәшәүҙән фәтеүә юҡ. Барыһы ла - бушҡа. Кем тыуыған, шул бәхетле, үлем тормоштан яҡшыраҡ; унан баш тартырға кәрәк..."

✓ *Үҙ-үҙенә ҡул һалыу сигенә барып еткән яҙыусы 1862 йылда Кәрәлек буйында булғандан һуң кире ҡәҙимге тормошҡа әйләнеп ҡайта, өйләнә һәм 1863 йылдың февралендә "Һуғыш һәм солох" романын яҙырға ултыра.*



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Дүртенсе бүлек. Көньяҡ Урал гун эпохаһында



Боронғо башҡорттар мифологияһының зороастр әҙәбиәте менән уртаҡ тамырҙарын асыҡлау Башҡортостандың тарих фәнендә аҙ өйрәнелгән тема. Алдараҡ бәйән ителгәндәрҙе ошондай анализ эшләүҙең тәүге тәжрибәһе итеп ҡарау фарыз. Әлбиттә, беҙ әлегә ошо ике әҙәбиәт ҡомартҡыһы оҡшашлыҡтарының барса аспекттарын да ентекләп тикшереү маҡсатын ҡуйманыҡ, әммә килтерелгән миҫалдар уларҙың идея-композиция оҡшашлығының, персонаждар исемдәренең тап килеүенең һәм уларҙың ҡайһы бер сифаттарын нәфис тасуирлау уртаҡлығының меңәр йылдар үткәс тә һаҡланып ҡалыуына дәлил булып тора. Бының шулай булыуына һәм шулай булырға тейешлегенә бары тик боронғо башҡорттарҙың зороастрмаздеистик диндең төп гимндарын һәм йолаларын яҡшы белеүе һәм ошо белемдәрҙе быуындан быуынға тапшыра килеүе шарт булып тора.

Шулай итеп, беҙ үҙебеҙ ҙә көтмәгәндә Көньяҡ Уралда сак-массагеттар дәүеренән дә һуңыраҡ булмаған ваҡыттарҙа башҡорт халҡының формалашыуында мөһим роль уйнаған этнос йәшәүе хаҡындағы һығымтаға килдек. Үҙ ваҡытында Ж.Ғ. Кейекбаев һәм С.И. Руденко кеүек олуғ ғалимдарҙың хеҙмәттәрендә интуитив рәүештә белдерелгән ошо фекер хәҙер ғилми яҡтан раҫланыу тапты. Әйтелгәндәр археология, антропология, тарихи этнография һәм башҡорт теле материалдарынан принципиаль рәүештә айырылып тормай. Әлеге замандың тарих фәнендә күп кенә хәҙерге халыҡтарҙың формалашыуын, ҡағиҙә булараҡ, сағыштырмаса һуңғы осор менән бәйләйҙәр. Беҙҙең һуңғы һығымталар фонында ошондай ҡараш примитив булып ҡабул ителә. Әммә беҙ башҡорттарҙың тарихи үҫешендә иң һуңғы булған компоненттарҙы инҡар итмәйбеҙ, ә тупланған материалдар уларҙың этногенезының башланғыс этаптарын иртә тимер быуаты менән бәйләү мөмкинлеген бирә, һәм был дәүерҙе беҙҙең эра рубежынан да һуңға ҡалдырып булмай.

Бер аҙ алғараҡ китеп, башҡорттарҙың "Урал батыр" героик эпосының тап археологик аспекты булыуы хаҡында әйтеп була, был уның, тарихи-генетик сығанаҡ булараҡ, әһәмиәтен арттыра. Эпоста Урал батырҙың ҡатындарының ҡош тундарын кейеү һәм һалыу сюжеттары йыш ҡабатлана. Улар ергә ҡош һынында ҡайта һәм, ҡош тунын һалғас, геройҙың ерҙәге һылыу кәләштәренә (ҡатындарына) әйләнә. Башҡорт фольклорында ҡатын-ҡыҙҙың, ҡош тунын кейеп, ҡошҡа әүерелеүе һәм, киреһенсә, уны һалыу менән кеше һынын алыуы хаҡындағы мотивтар киң таралған. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡошҡа әйләнә алыуы һәм яңынан кеше булып китеүе, күрәһең, Урал төбәге халыҡтары фольклорында иң ныҡ таралған сюжеттарҙан булғандыр, һәм ул VI - XII быуаттарҙың бронзанан ҡойоп яһау сәнғәтендә сағылыш тапҡан, бында тиҫтәләрсә кеше башлы, киң ҡанатлы ҡоштарҙың скульптура-һындары табылыуын ошоға миҫал итеп килтерергә мөмкин. Урта Кама буйын ошондай табыштарҙың иң күп таралған территорияһы, тип иҫәпләйҙәр, әммә улар Көньяҡ Уралда һәм Себерҙә лә осрай.

Авторҙар ҡош-кеше һындарының ошо үтә киң төбәк ҡәбиләләренең һынлы сәнғәтенә ҡараған бай һәм төрлө йөкмәткеле предметтарҙың бер өлөшө генә икәнлеген яҡшы аңлай, әммә был осраҡта беҙ тап ошо табылдыҡтар төркөмөн айырып ҡарайбыҙ. Ошо һындарҙың "Урал батыр" эпосында тасуирланған ҡатын-ҡыҙ-ҡош кейеме менән ғәжәпләнерлек тап килеүе эпостың төп героиняһы булған Һомай (Һомайғош) образының Урал халҡының бронзанан ҡойоп яһау сәнғәтендәге сағылышылыр, тигән фекергә килергә мөмкинлек бирә. Һомай образының (Хуми, Умей, Хумай варианттары ла осрай) Евразияның боронғо һәм урта быуаттарҙағы халыҡтары мифологияһында бик киң территорияла таралыуын иҫтә тоторға кәрәк, әммә был осраҡта һүҙ Урал (анығыраҡ әйткәндә, Көньяҡ Урал) хаҡында бара, ул башҡорт халҡының тарихи тәү Ватаны, һәм тикшеренеүсе Тарихи (Боронғо) Башҡортостан биләмәләрендә табылған археологик предметтарҙың мәғәнәүи асылын асыу йәһәтенән "Урал батыр" эпосын ҡулланырға хаҡлы һәм был шулай булырға тейеш тә ул.

Шулай итеп, юғарыла бәйән ителгәндәрҙән сығып, фәндә бөгөн Көньяҡ Уралда иртә тимер быуатында (б.э. IV быуатына тиклем) йәшәгән этнос йөҙөндә башҡорт халҡының йыраҡ, әммә туранан-тура ата-бабаларын күрергә хоҡуҡлы икәнебеҙҙе дәлилләүсе раҫлауҙар системаһы бар, тип әйтә алабыҙ.

Беҙҙең ҡарашҡа, ошо замандың йәшәү рәүеше һәм мәҙәниәттәре менән бер-береһенән айырылып торған бик күп ҡәбиләләре араһынан ошондай ролгә төбәктең күсмә йә иһә ярым күсмә ҡәбиләләре дәғүә итә. Күрәһең, тап улар халыҡ үҙе ижад иткән иҫ китмәле эпик ҡомартҡы булған "Урал батыр" эпосы йөкмәткеһен, халыҡ тарихының поэтик формаһы булараҡ, быуындан быуынға тапшыра килеп, хәҙергә тиклем һаҡлап ҡала алған.

Алдараҡ әйтелгәнсә, иртә тимер быуаты ҡәбиләләрен урта быуат башҡорттары менән тоташтырыусы материалдар тик эпос менән генә сикләнмәй. Ошо мәғлүмәттәрҙе лә ҡушып, XX быуаттың күренекле төркиәтселәре С.Е. Маловтың, С.И. Руденконың, Ж.Ғ. Кейекбаевтың һәм башҡаларҙың әлеге ҡарашты раҫлаусы фекерҙәрен үҫтерә барып, беҙ бөтөн Көньяҡ Уралды боронғо башҡорттар иле, йәғни Боронғо Башҡортостан, тип атарға тәҡдим итәбеҙ. Ошо положениены нигеҙләгән саҡта беҙ ошо дәүерҙәге Көньяҡ Урал ҡәбиләләренең этномәҙәни яҡтан бик ҡатмарлы булыуынан һәм улар араһында, боронғо төркиҙәр менән бер рәттән, фин-уғыр (ултыраҡ тормошта йәшәгән ҡара абыҙ, пьянобор, иткүл һәм горохов мәҙәниәтттәре) һәм боронғо иран (күсмә һәм ярым күсмә ҡәбиләләрҙең бер өлөшө) телдәрендә аралашыусылар йәшәүенән сығып эш иттек. Шулай ҙа беҙ ошо ҡәбиләләр вариҫтарының башҡа телле, әммә урындағы компонент рәүешендә формалаша башлаған башҡорт халҡы составына инеп китеүенә инанғанбыҙ. Быны тарихи процесс үҫешенең тәбиғи барышы һөҙөмтәһе итеп ҡабул итеү зарур.

Бында донъяның төрки телле халыҡтары тарихының иң боронғо этаптары мәсьәләһе буйынса заманса ҡараштарҙы килтереү урынлы булыр, тибеҙ. Билдәле булыуынса, фән ҡарамағында ер шарының хәҙерге халыҡтары этногенезының иртә этаптары хаҡында ысынбарлыҡҡа тап килгән мәғлүмәттәр бирерҙәй бер ниндәй ҙә яҙма сығанаҡтар юҡ, археология һәм антропология материалдары үтә наҡыҫ, һәм, иң мөһиме, улар боронғо кешеләрҙең ниндәй телдә аралашҡанын аныҡ итеп асыҡлай алмай.

Ошо мәсьәлә буйынса мәғлүмәт эҙләүҙә халыҡтар телдәре һәм уларҙың хәҙерге ваҡытта көн иткән биләмәләрендә таралыуы этаптары хаҡында билдәле булған иң иртә яҙма сығанаҡтар бер ни тиклем йүнәлеш бирә. Алдараҡ, икенсе бүлектә, финдәрҙең һәм эстондарҙың иң боронғо ата-бабаларының Көнсығыш Балтика буйына һәм Скандинавияның хәҙер улар көн иткән биләмәләренә Урал-Волга буйы территорияһынан килеүҙәре, һәм ошо күсештең мезолиттан да һуңыраҡ булмауы хаҡында бәйән ителгәйне.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

Тап шул мәлдә Толстой буласаҡ ҡайныһы Андрей Берстың кәңәше буйынса Һамар губернаһы башҡорттарына ҡымыҙ эсергә килә. Беҙ бында "Тәүбә итеү" авторын бөтөнләй башҡа сифатта күрәбеҙ. "Мин унда гәзиттәр ҙә алдырмаясаҡмын, хаттар ҙа уҡымаясаҡмын, китаптың ни икәнлеген дә онотасаҡмын, ҡымыҙ эсеп, һарыҡ ите ашап, ҡорһағымды ҡояшҡа ҡыҙҙырып тик ятасаҡмын, үҙем дә һарыҡҡа әүерелеп, һауығасаҡмын..." тип яҙа дуҫтарына яҙыусы. Һуңыраҡ дуҫы Алексей Фетка: "Бында сафлығынан яңы сығып килгән йәштәге һоҡланғыс ерҙәр, бигерәк тә ябай һәм боҙолмаған халыҡ... Геродотты уҡыйым, галактофак-скифтар хаҡында ул ентекле итеп яҙып ҡалдырған, шул скифтар менән хәҙер мин йәшәйем инде. Башҡорттарҙан Геродотлыҡ аңҡый..." - тип хат яҙа.

Толстойҙың Кәрәлек буйы башҡорттары менән артабан тиҫтә йылдар буйына аралашып йәшәүе хаҡында тағы ла бик күпте яҙырға мөмкин булыр ине. Бында шуны ғына әйтергә теләйем: үҙ-үҙенә ҡул һалыу сигенә барып еткән яҙыусы 1862 йылда Кәрәлек буйында булғандан һуң кире ҡәҙимге тормошҡа әйләнеп ҡайта, өйләнә һәм 1863 йылдың февралендә "Һуғыш һәм солох" романын яҙырға ултыра, уны 1869 йылда тамамлай. Ә инде яҙыусының "Тәүбә итеү" яҙмаһы шундай һүҙҙәр менән тамамлана: "Һәм мин уянып киттем..."

Тарихта "әгәр ҙә..." тигән һүҙҙән башланған теләк-шарт һөйкәлеше юҡ. Шулай ҙа мәшһүр фекер эйәһенең "Тәүбә итеү" яҙмаһын уҡыһаң, "әгәр ҙә..." тип тә ҡуяһың. Әйе, әгәр ҙә Лев Толстой Кәрәлек буйы башҡорттары менән осрашмаған булһа, беҙ уның "Һуғыш һәм солох" романын уҡый алыр инекме икән? Әйтеүе ҡыйын.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Калинковичи-Мозырь һөжүм итеү операцияһы. Мозырь рейды

Ә алдараҡ булып үткән алыштарҙа беҙҙең частарыбыҙ ҙа байтаҡ ҡына юғалтыуҙар кисерә, шуға күрә дошмандың бер ҙур йоҙроҡ кеүек тупланған төркөмөнә туранан-тура һөжүм итеү тағы лы күберәк юғалтыуҙарға дусар итер ине. Шуға күрә корпус командиры яңы ҡарар ҡабул итә: немецтарҙың Дрозды, Военный Городок, Калинковичи райондарындағы үтә ныҡлы терәк пунктарын урап үтергә һәм Мозырға бер үк ваҡытта көньяҡтан һәм төньяҡ-көнбайыштан бәреп инергә. Комкорҙың бойороғона ярашлы, 60-сы гв. атлы полкы (Г.Е. Фондеранцевтан һуң гв. майоры Р.М. Ғәзиев ваҡытлыса полк командиры итеп тәғәйенләнә) 12 ғинуарҙа, Припять йылғаһы аша сығып, Клинск разъезынан төньяҡ-көнсығыштараҡ тимер юл күперен шартлатырға тейеш була. 62-се гв. атлы полкы 14-се гв. атлы дивизияһы менән бергә Мозырь тимер юл станцияһына һөжүм итә. 58-се гв. атлы полкы Моисеевка һәм Слободка рубежында хәрәкәт итә, немецтарҙың күп кенә көстәрен албырғатып, корпустың башҡа частарына иркенләберәк эш итергә мөмкинлек тыуҙыра. 60-сы гв. полкына Мозырь партизандары бригадаһынан бер төркөм партизан беркетелә, улар беҙҙең яугирҙарыбыҙҙы ҡышын да туңмай ҡалған Припять йылғаһы аша сығырға, һаҙлыҡтар аша үтергә ярҙам итә, полк тимер юлына бер юғалтыуһыҙ барып сыға.

Клинск районында немецтар тимер юлын даими күҙәтеү аҫтында тота, ул бик ныҡ һаҡлана. Тимер юлы буйлап урман ике яҡтан да 100 - 150 метр арауыҡта киҫеп алынған, һаҡсылар пулеметтар һәм минометтар менән ҡоралланған. Дошмандың оборона ҡоролмаларына тиклем бары тик шыуышып ҡына барып етергә мөмкин була. ПТР наводчигы, гв. өлкән сержанты Е.М. Крюковҡа үтә яуаплы боевой бурыс ҡуйыла - юл һаҡсыларының пулемет расчетын юҡ итергә. Өлкән сержант, ағас төптәре араһынан шыуышып барып, пулемет дзотының бойницаһына төҙәп, ике мәртәбә ата, пулемет туҡтап ҡала. Шул саҡта һул яҡтағы траншеянан немец автоматчиктары ут аса. Гв. кесе сержанты Ф.А. Морозов, үҙенең пулеметы менән уларҙың тылына сығып, артҡы яҡтан дошман һалдаттары өҫтөнә бер нисә очередь биргәс, автоматчиктар ҙа атыуҙан туҡтай. Шул арала эскадрондың һул флангыһындағы яугирҙар тимер юлы буйына килеп өлгөрә. Саперҙар Клинск разъезының уң һәм һул яҡтарына рельс аҫтына тиҙ арала шартлатҡыс һала. Бер ни ҙә һиҙмәгән паровоз машинисы үҙе алып барған эшелонды разъезд аша уҙғара алмай - көслө шартлау паровозды рельстарҙан алып ырғыта, вагондар бер-береһе өҫтөнә өймәкләнә. Немецтарҙың Мозырь гарнизоны тимер юлынан ярҙамға ҡорал да, тере көстәрен дә килтерә алмай. Клинск разъезында тимер юлын киҫеү 61-се армия соединениеларына Калинковичи станцияһын алыу өсөн бик уңайлы шарттар тыуҙыра. Дивизиябыҙҙың 60-сы гв. полкының ҡаһарман яугирҙары ошо боевой операцияны уңышлы башҡарып сыҡҡандары өсөн дәүләт наградаларына лайыҡ була. Полк командиры, гв. майоры Р.М. Ғәзиев Александр Невский орденына, эскадрон командиры П.Я. Шевченко - Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. Бронебойщик Е.М. Крюков һәм пулеметчик Ф.А. Морозов та ошо алышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн бүләкләнә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Мин үҙемдең олимпиадала еңгән уҡыусыларыма шулай тием: һеҙҙең еңеү яҡшы, әммә белемегеҙ йәмғиәт, ил, кешелек файҙаһына ҡулланылмаһа, уның бер кәрәге юҡ.*



**Өфөләге Республика инженер лицей-интернатының 10-сы класс уҡыусыһы Вадим Харисов быйыл Ҡаҙағстанда 57-се халыҡ-ара Менделеев олимпиадаһында алтын миҙал яулағайны. Артабан ул Цюрихта 55-се Халыҡ-ара химия олимпиадаһында ла ҡатнашып, тағы алтын миҙалға лайыҡ булды. Шулай уҡ һуңғы ике йылда ул бөтә Рәсәй уҡыусылар олимпиадаһының йомғаҡлау этабында абсолют еңеүсе булып тора. Вадим Харисовты олимпиадаға әҙерләү менән республика Олимпиада хәрәкәте остаздары ассоциацияһы (АНОД) ҡатнашыусылары шөғөлләнә. "Башинформ" хәбәрсеһе Ассоциацияға нигеҙ һалыусыларҙың береһе һәм уның ағзаһы, уңышлы йәш педагог Айнур ҒҮМӘРОВ менән осрашты.**

# УҠЫТЫУСЫЛАРЫҒЫҘҒА...

## ваҡытында рәхмәт әйтергә өйрәнегеҙ!



**Айнур Мансур улы, һеҙҙе ошо арала уҡыусығыҙҙың ҙур еңеүе менән республика Башлығы ла ҡотланы...**

- Эйе, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең аҙналыҡ кәңәшмәһендә егерме йыл эсендә тәүге тапҡыр республикаға химия буйынса Бөтә донъя олимпиадаһының алтын миҙалдарын килтергән уҡыусым Вадим Харисовты һәм мине дәүләт наградалары менән бүләкләне, емешле эшмәкәрлек өсөн рәхмәт белдереп, "Химиктарыбыҙ, алға!" тине. Мин, үҙ сиратымда, республика педагогтары исеменән Педагог һәм остаз йылында республика етәкселегенең ярҙамын һәм иғтибарын тойоу бик ҡыуаныслы булыуын әйттем. Шулай уҡ республика Башлығына үҙемдең педагогым, Рәсәйҙең халыҡ уҡытыусыһы Лиза Әгәҙуллинаның Өфөлә беренсе уҡытыусыға һәйкәл ҡуйыу тураһындағы хыялын тормошҡа ашырыуҙы һорап мөрәжәғәт иттем. Башҡортостан Башлығы был мәсьәлә менән шөғөлләнергә вәғәҙә итте.

**Һеҙ үҙегеҙ ҙә ул саҡта республика Башҡорт лицейы тип аталған уҡыу йортонда уҡығанһығыҙ, олимпиадасы булғанһығыҙ...**

- Эйе, артабан, Башҡорт дәүләт университетының химия факультетын тамамлағандан һуң үҙемдең ошо тыуған уҡыу йортона химия уҡытыусыһы булып эшкә ҡайттым. Бер үк ваҡытта Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең химия институты аспирантураһын тамамланым. 2016 йылда диссертация яҡлап, фән кандидаты булдым. Мин һәр саҡ фән менән шөғөлләнергә һәм уҡытырға теләнем. Эшләй башлауымдың беренсе йылында уҡ минең уҡыусыларымдың береһе олимпиаданың республика этабында еңде. Миңә уҡытыу оҡшай, әммә һәләтле балалар менән эшләү өсөн предметты тәрән белергә, үҫешергә, яңы фәнни ҡаҙаныштар менән ҡыҙыҡһынырға кәрәклеген аңлайым.

**Айнур Мансур улы, Башҡортостан уҡыусылары тиҫтә йылдар дауамында химия буйынса төрлө олимпиадаларҙа юғары позициялар биләй. Һеҙҙең уҡыусыларҙың шундай ҙур уңышҡа өлгәшеүенең сере нимәлә?**

- Бында бер ниндәй ҙә сер юҡ - был бик законлы һөҙөмтә. Иң мөһиме - системалы әҙерлек. Күп йылдар лицейҙа һәләтле балалар менән остазыбыҙ - халыҡ уҡытыусыһы Лиза Ҡыям ҡыҙы Әгәҙуллина методикаһы буйынса эш алып барыла. Шуға күрә уҡыусыларыбыҙҙың еңеүе - был бөтә командабыҙҙың еңеүе, унда уҡытыусылар ғына түгел, ә үткән олимпиадаларҙа еңеүселәр ҙә ҡатнаша. Олимпиада хәрәкәте остаздары ассоциацияһы сиктәрендә мәктәп уҡыусылары менән эш йыл әйләнәһенә дауам итә. Был - өҫтәмә рәүештә төшкө аштан һуңғы дәрестәр, йәкшәмбе мәктәбе, каникул ваҡытында уҡыу-күнекмә йыйылыштары. Һәләтле генә түгел, бик эшсән дә беҙҙең балалар.

Совет осоронан алып беҙҙең республикала фәнде уҡытыу буйынса яҡшы традициялар һалынған. Был, тәү сиратта, үҫешкән химия производствоһы менән бәйле. Ә производствоға, билдәле булыуынса, кадрҙар, кадрҙарға университеттар кәрәк. Бәхеткә күрә, беҙҙә химия белеменең бөтә дәрәжәләре буйынса төрлө институт бар. Улар Рәсәйҙә генә түгел, донъяла ла яҡшы позицияларҙа тора.

Ҡыҙыҡлы факт һөйләйем: Астанала олимпиадала беҙ Лиза Әгәҙуллинаның уҡыусыһы Булат Ғарифуллин менән осраштыҡ. Ул әле Өфөләге 13-сө дауахананың баш табибы булып эшләй. 1998 йылда ул ошо Астаналағы олимпиадала, ә һуңынан Австралияла алтын миҙал яулай. Шул ваҡыттан алып, химия менән шөғөлләнмәһә лә, олимпиадасылар өсөн мәсьәлә төҙөүҙә дауам итә һәм унда жюри сифатында йөрөй. 2018 йылда уның уҡыусыһы Тимур Маннанов, беҙҙең Ассоциация рәйесе, Беларуста үткән Халыҡ-ара олимпиадала алтын миҙал ала һәм хәҙер 5 йылдан һуң Тимурҙың уҡыусыһы Вадим Харисов та алтын миҙалға лайыҡ булды. Был - дүртенсе быуын еңеүе.

**Көслө уҡыусылар араһында буласаҡ еңеүселәрҙе нисек танырға?**

- Олимпиадасылар менән эшләү сере бик ябай. 7-се класс уҡыусыларына 11-се класс уҡыусылары үтә торған дәрестәрҙе биреп ҡарайһың. Әгәр уҡыусы был дәрестәрҙәге күнегеүҙәрҙе үҙләштерә алһа, ул төбәк йәки бөтә Рәсәй олимпиада кимәленә тиклем үҫәсәк. Мин башта теманы бөтә класҡа аңлатам һәм яҡшы үҙләштергән балаларҙы айырып, студенттарға тапшырабыҙ. Унда улар юғарыраҡ кимәлдәге мәсьәләләрҙе сисә.

Ҡайһы бер балалар, ысынлап та, бик тиҙ үҫешә, уларға нигеҙ биреү генә лә етә һәм улар артабан үҙаллы шөғөлләнә, уҡый ала. Ә ҡайһы берҙәрен ниндәйҙер айырым алымдар буйынса шөғөлләндерергә кәрәк.

Ассоциацияның девизы: олимпиада еңеүсеһен түгел, ә кешене тәрбиәләү. Илебеҙҙәге һуңғы ваҡиғалар менән бәйле был айырыуса көнүҙәк яңғырай.

Өлкән быуындың ролен дә дөрөҫ баһаларға кәрәк. Тәрбиә бирмәйенсә, белем биреү - ул идара итеп булмаған боеголовка кеүек, бик ҡурҡыныс. Һәм был йәһәттән шул мөһим: бала бик һәләтле икән, ҡыҙыҡлы булһын өсөн уны фәндең иң алдынғы өлөшө менән таныштырыу кәрәк.

Мин үҙемдең олимпиадала еңгән уҡыусыларыма шулай тием: һеҙҙең еңеү яҡшы, әммә белемегеҙ йәмғиәт, ил, кешелек файҙаһына ҡулланылмаһа, уның бер кәрәге юҡ.

**Һеҙҙеңсә, хәҙерге балалар ни тиклем талантлы?**

- Мин талантты тиҙ талантҡа һәм ваҡыт үтеү менән асылған талантҡа бүләм. Һәм уны ваҡыт үтеү менән, уның һөҙөмтәлелеге, кешенең үҙ тормошонда өлгәшкәндәре буйынса ғына үлсәп була. Минеңсә, ул йәмғиәткә файҙалы булһа ғына уны талант тип атарға мөмкин. Уңышлы булыр өсөн бер йүнәлештә ныҡлы эшләргә кәрәк, йәмғиәткә файҙалы булыр өсөн периферик күреү һәләте лә булырға тейеш. Был йәһәттән остаздың роле баһалап бөткөһөҙ.

Хәҙер балаларҙың ысынлап та мөмкинлектәре бик күп. Бындай уңайлы мөхитте бөтәһенә лә булдырһаҡ, таланттар буласаҡ. Мул уңыш алыу өсөн нимә эшләйбеҙ? Беҙ уны хәстәрләйбеҙ. Минеңсә, балалар ҙа үҙҙәрен хәстәрләгәндә тойорға тейеш. Йәштәрҙең Башҡортостандан ситкә уҡырға инеүендә проблема күрмәйем. Әгәр ҙә уларға дөрөҫ тәрбиә бирһәк, хәстәрләһәк, улар быны беләсәк, рәхмәтле буласаҡ һәм республикаға ҡайтырға ынтыласаҡтар. Кесе Ватанға ярҙам итеү буйынса "Атайсал" проектының ни тиклем популяр булғанын ҡарағыҙ. Тимәк, ҡайҙа ғына барһаң да, йөрәктә Ватанға һөйөү һаҡлана.

**Химия хәҙер нисек үҙгәрә?**

- Химия ысынлап та үҙгәрә, балаларҙы әҙерләү ҙә үҙгәрә. Мәҫәлән, 2001 йылда беҙгә, студенттарға, химия фәне 18 миллион матдәне белә, тинеләр. Әле 200 миллиондан ашыу матдә билдәле, йәғни химик матдәләр һаны 10 тапҡырға артҡан. Был тәңгәлдә минең өлөшөм дә бар. Донъяға билдәле булмаған 75 матдәне мин синтезланым һәм лабораторияла асыҡланым, уның тураһында диссертация яҙҙым.

Уҡыусыларыма шулай тип әйтәм: химия алфавит кеүек. Урыҫ телендәге алфавит хәрефтәре ҡушылыуынан бик күп әҫәрҙәр яҙырға мөмкин. Химия менән дә шулай - элементтар йыйылмаһы бер төрлө, әммә бик күп комбинациялар һәм матдәләр синтезланырға мөмкин.

Һуңғы 20-25 йылда химияның яңы йүнәлештәре асыла, улар әлегә тиклем бындай киң ҡулланылышҡа эйә булмаған һәм әлегә тиклем күренмәгән. Әммә хәҙер тренд таҙа химия өсөн түгел. Хәҙер химия һәм информатика, химия һәм биология синтезы кеүек йүнәлеш киң тарала. Беҙ геномды расшифровкалау мәленә аяҡ баҫтыҡ. Фән һәм мәғлүмәт технологиялары киҫелешендә тап ошонда ҙур асыштар яһаласаҡ. Шуға күрә беҙ балаларыбыҙҙы физика, информатика, биология кеүек тәбиғи фәндең башҡа өлкәләрендә лә үҫтерергә тырышабыҙ.

Әлеге ваҡытта илдә импортты алмаштырыу менән әүҙем шөғөлләнәләр. Был беҙҙең өсөн ысынлап та уйланырға бер сәбәп. Таныш етештереүселәремдең күбеһе әйтеүенсә, беҙгә кадрҙар, баштар һәм ҡулдар, беҙгә быраулау иретмәләрен алмаштырыу кәрәк. Эйе, мин шаяртмайым.

✓ *Элегерәк өлкәндәр балаларына "Бүтәгәнән түбән бул", тип аҡыл өйрәтә ине. Быны, әлбиттә, "кеселекле бул", тип аңлау ҡатмарлы түгел. Үҙебеҙҙең ауыҙҙан сыҡҡан һәр матур һүҙ үҙебеҙҙе үк шатландырырлыҡ булһын.*



**Айнур Мансур улы, лицейҙы тамамлаусылар, ғәҙәттәгесә, имтиханда юғары балл ала. Уҡыусыларҙы аттестациялауҙың был форматына нисек ҡарайһығыҙ?**

- Идея булараҡ, имтихан форматы бик шәп. Ул һәләтле сығарылыш уҡыусыларына илдең иң яҡшы юғары уҡыу йорттарында белем алыу мөмкинлеген бирә. Был ысынлап та шундай трамплин, мөмкинлек. Әммә, икенсе яҡтан, имтихан һөҙөмтәләре бөтә уҡыу йортон баһалау критерийына әйләнгәнлектән, уның бөтә ауырлыҡтары мәктәп иңенә төштө - был белем биреүгә, тәрбиәгә бик насар йоғонто яһай. Имтихан һөҙөмтәләре юғары булмаған мәктәптәрҙе беләм, әммә уларҙа психологик климат бик яҡшы, балаларҙың барыһы ла афариндар.

Мәғлүм булыуынса, имтиханды үҙгәртеү тураһында һүҙ бара, сөнки был форматта өҫтөнлөктәр менән бергә асыҡтан-асыҡ етешһеҙлектәр ҙә бар. БДИ-ны, халыҡ-ара тест программалары кеүек юғары уҡыу йорто проектына әүерелһен өсөн, мәктәптән ситтә тапшырыу хәл ителһен ине.

**2023 йыл Рәсәйҙә Уҡытыусы һәм остаз йылы тип иғлан ителде. Тематик йылдан нимә көтәһегеҙ?**

- Уҡытыусы тураһында ниндәй ҙә булһа ыңғай фекер йөрөтөү яҡшы, тип уйлайым. Был ыңғай ҡараш тыуҙыра, һөнәрҙең абруйын күтәрә. Нимә тураһында күберәк һөйләһәк, ул шул тиклем популярлаша бара. "10-сы класс уҡыусыһы" тип эҙләү системаһына баҫығыҙ әле. Унда "Вадим Харисов халыҡ-ара химия олимпиадаһында алтын миҙал яуланы" тигән түгел, ә башлыса кире мәғлүмәт сығасаҡ. Тимәк, мәктәпкә ҡағылышлы мәғлүмәт фоны кире, дәүләт кимәлендә быны үҙгәртеү өсөн нимәлер эшләнһә, мин бары тик ҡыуанам ғына.

Уҡытыусылар тураһында күберәк һөйләргә кәрәк. Дөрөҫөрәге, уҡытыусыларыбыҙ байтаҡ, улар, бәлки, бер ниндәй ҙә юғары ҡаҙаныштарға өлгәшмәгәндер, әммә иң мөһимен эшләй - беҙҙе шәхес булараҡ тәрбиәләйҙәр. Күп кенә таныштарым быны аңлай һәм уҡытыусыларына рәхмәт белдерә.

Уҡытыусыларығыҙға ваҡытында рәхмәт әйтергә кәрәк, мин быны уҡытыусы булараҡ та, уҡыусы булараҡ та әйтәм. Балаларҙың ата-әсәһенә ҡарата рәхмәте, уҡыусыларҙың уҡытыусыларына, остаздарына ҡарата рәхмәте - был бәхет юлы, артабанғы ҡаҙаныштар өсөн сәбәп!

Хәҙер уҡытыусыға рәхмәт белдереү өсөн төрлө акциялар бар, ниңә уларҙа ҡатнашмаҫҡа! Үҙегеҙҙе лә, уҡытыусығыҙҙы ла бәхетле итегеҙ. Мин дә шулай эшләргә уйлайым. Бының өсөн 1 сентябрҙә йәки Уҡытыусылар көнөн көтөргә кәрәкмәй, теләгән көндө шылтыратып, йә барып, "Рәхмәт" тип әйтергә мөмкин.

**Әлфиә ӘҺЛИУЛЛИНА.**

*ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ*

# ЯҒЫМЛЫ БУЛЫУ АУЫРМЫ,

## йәки Түрә булһаң да, тупаҫ булма!

**Үҙенә ҡарата башҡаларҙың мөләйем булыуын теләмәгән бер кем юҡтыр. Арабыҙҙа ябай, алсаҡ ир-егеттәребеҙ, гүзәлдәребеҙ бихисап, әлхәмдүлиллаһ. Әммә ҡайһы берҙә кәйефте ҡырыусылар ҙа табылып тора. Күңелдә тут ҡалдырыусы шундайҙар хәтерҙә лә һаҡланыусан. Ҡайһыларыбыҙ, бәлки, тупаҫыраҡ һүҙҙәргә әллә ни иҫе китеп тә бармайҙыр, әммә, ҡәҙерле туғандар, мин үҙем хатта бер аҙ ғына ҡорораҡ һүҙҙе лә ауыр ҡабул итәм. Ошо юҫыҡта айырыуса үҙ милләттәштәремә талапсан булыуымды тоям. Башҡа халыҡтарға ҡарата итәғәтле була белгән башҡорт бер-береһенә уғата асыҡ йөҙлө булырға тейеш, тигән инаныуҙамын. Ә сит тарафтарҙа йәшәгән осорҙары бындай хистәр айырыуса юғары булалыр.**



Хәрби медицина факультетын әле генә тамамлап, Рәсәй өлкәләренең береһендә хеҙмәт итә башлаған мәлем. Башта полк врачы итеп бер часҡа тәғәйенләнеләр. Гарнизондағы коллегаларымды ла әле белеп етмәйем, әммә улар араһында яҡташтарыбыҙ барлығы хаҡында ишеткеләп йөрөйөм. "Их, шулар менән танышып алырға ине!" тип хыялланам. Ана шул саҡта тәүге мәртәбә госпиталь буйынса дежурға торҙом. Йәш табипты башта олораҡтарға беркетеп ҡуялар ине. Бәхетемә, мине майор званиеһындағы бер ағай - яҡташым менән бергә ҡуйғандар. Госпиталь начальнигы: "Товариш лейтенант, һеҙгә яҡташығыҙ Ғәзинуров менән (фамилияһын үҙгәрттем) бергә дежурҙа тороуы уңайлыраҡ та булыр", - тигәс, кәйефем күтәрелеп китте. Минең һымаҡ уҡ, башта Өфөлә, аҙаҡ Куйбышев хәрби медицина факультетында уҡыған был ағай дежурлыҡ башланғас та тәүҙә "Ҡайһы районданһың?" тигән һорау биреп ҡыҙыҡһыныр, тип өмөт иткәйнем. Әммә ул ҡабул итеү бүлмәһендәге аппаратура, документтар менән таныштырыуҙан башланы. Ярай, шулай кәрәктер. Эргәлә урыҫ ҡыҙы - медсестра йөрөгәнгә күрә, үҙ телеңдә аралашыу ҙа килешеп етмәйҙер, тип уйлайым. Әллә ҡайҙан күренеп тора: был майор урыҫ һүҙҙәрен нисек кенә матур итеп әйтергә тырышмаһын, һөйләшеү акценты - барыбер башҡорттоҡо шул! Уның үҙенең ҡайһы районнан икәнен белгем килгән һымаҡ, моғайын, минең дә кемлегемде, ҡайҙан булыуымды белеү уға ла ҡыҙыҡтыр бит, тигән уй баштан китмәй, шулай ҙа... Уңайлы пауза мәлен файҙаланып: "Товарищ майор, вы из Башкирии?" - тигән һорауым һауала аҫылынып тороп ҡалды. Һорауымды бөтөнләйгә "ишетмәгән" был ағай "лейтенант менән ваҡланаһы" килмәне, ахыры. Башҡортсалап һүҙ башлап ҡарарға тигән уйымдан баш тарттым... Башҡа ваҡыттарҙа ла осраҡыланым был яҡташты, әммә туған телдә һөйләшкәнен бер ҡасан да ишетмәнем. Уның урынында берәй сит милләт кешеһе булһа, ошо хәл хаҡында һис кенә лә һүҙ ҡуйыртып тормаҫ инем...

Бер нисә йылдан үҙем дә "ҙурайып" алдым. Маҡтана тип уйламағыҙ. Әлеге "майор" званиеһена ла етеп, хатта уны аша атлап, "подполковник" та булдым. Әммә хеҙмәт итергә килгән йәш офицерҙарға ғына түгел, ә һәр бер ябай һалдатҡа ла иң яҡшы мөнәсәбәт күрһәтергә, уларға гел ярҙам итергә тырышып ҡына торҙом. Яҡташтарыбыҙҙы айырыуса яҡын күрҙем. Ҡайһы берҙәренә юғарыраҡ вазифаға күсергә лә булышманым түгел. Башҡортостандан булған һалдаттарҙы өйгә ҡунаҡҡа алып ҡайтҡылай торғайным. Командирҙары менән һөйләшеп, уларҙы оптпускыға ла ҡайтарғыланым (ул саҡта һәр һалдатҡа ла отпуск теймәй ине). Кешеләргә яҡшылыҡ эшләүҙән үҙем оло ҡәнәғәтлек кисерә инем...

Бәғзе берәү, бәлки, ҡапыл да иғтибар итмәҫлек, әммә минең күңелдә төйөр ҡалдырған тағы бер хәл. Туҡһанынсы йылдар уртаһы. Хәрби хеҙмәтем тамамланыуға ла алты-ете йыл ҡалғандыр. Өлкән улым гарнизоныбыҙҙағы урта мәктәпте көмөш миҙалға тамамлағас та, Өфөләге медицина университетына барырға ҡарар итте. Шул ваҡытҡа тура килтереп, сираттағы отпускымды алдым да, улым менән Башҡортостанға ҡайтып төштөк. Хеҙмәтемде тамамлағас, ситтә тәрән тамыр йәйеп өлгөрмәҫ элек үҙем дә ғаиләм менән Башҡорт ерендә ҡабаттан оя ҡороу тигән теләгемде тормошҡа ашыра башларға ине ниәтем. Улымды уҡырға инеү проблемаһы менән яңғыҙын ҡалдырғым да килмәй, уға үҙемдең ярҙамым кәрәк тип һанайым, янында ғына йөрөйөм. Ул саҡ Өфө вуздарында Башҡортостанда йәшәгән һәм ауыл мәктәбендә уҡыған "медалистар" өсөн ташлама бар ине: имтихандар башланыуға тиклем үк "тестирование" тигән бер процедура ғына үтеү һәм шунда күпмелер балл йыйып, имтихanһыҙ уҡыуға инеү мөмкинлеге. "Поселок Свободный" тип аталған беҙҙең гарнизондың да ауыл еренә тиңләнеүе, шул уҡ ваҡытта улымдың пропискаһы минең тыуып үҫкән ҡасабала - Баймаҡ районында булыуы, бер яҡтан ҡараһаң, ошо ҡабул итеү шарттарына тура килә һымаҡ.

Шул мәл миңә берәү ҡыуаныслы хәбәр еткерҙе: медицина университетына документтарҙы, имтиханды ла Өфөгә барып тормаҫтан, Башҡортостандың Урал аръяғы ҡалаларының береһендә биреү мөмкинлеге бар икән! Шул күсмә ҡабул итеү комиссияһының яуаплы сәркәтибе - үҙебеҙҙең башҡорт кешеһе, тип әйттеләр. Беҙҙең документтар теҙмәһе әлеге талапҡа тап килеү-килмәүе икеле булғас, ошо хаҡта белешәйем әле тип, әлеге яуаплы сәркәтипкә мөрәжәғәт итмәк булдым. Хәрби кешегә ҡарата яҡташтарымдың ихтирамлы мөнәсәбәтен яҡшы белгәнгә күрә, был начальниктың бүлмәһенә яғаларына медицина эмблемалары тағылған подполковник формаһында инеүҙе кәрәк тип таптым. Ингәс тә, башҡортсалап, һаулыҡ һораштым. "Һаумыһығыҙ. Тыңлайым", - тине ул да саф башҡорт телендә. Әлеге проблемабыҙҙы ҡыҫҡаса аңлатып, бәйән итеп бирҙем. "...Бына шул "тестирование" мәсьәләһен һеҙҙең күсмә комиссияла хәл итергә булырмы икән? Әгәр мөмкин булмаҫтай булһа, бөгөн киске поезд менән Өфөгә китәйек, тигәйнек", - тип тамамлап ҡуйҙым һүҙемде. "Китегеҙ", - тине был ағай шунда уҡ. Ышанаһығыҙмы, башҡа бер һүҙ ҙә әйтмәне! "Ярай, аңлашылды. Рәхмәт!" - тип мин дә уның бүлмәһенән мөмкин тиклем тиҙерәк сығып китеү яғын ҡараным...

Теҙгенде бик ҡыҫҡа тоторға яратҡан был түрәнең яуабында, бер яҡтан ҡараһаң, һис бер тупаҫлыҡ юҡ. Миңә уның бер зыяны ла теймәне бит. Урыҫта "Краткость - сестра таланта" тигән әйтем дә йөрөй шул. Әммә миңә "Һаумыһығыҙ, тыңлайым, китегеҙ" тигән өс кенә һүҙен сарыф иткән был кеше ни өсөндөр йәнһеҙ роботты хәтерләтте. Уның бүлмәһенән сыҡҡанда кәйефем үтә ныҡ ҡырылған ине. Ыңғай яуап алмаған хәлдә лә, һис юғында, мин был кешенән яҡынса: "Был мәсьәләне баш ҡаланың үҙенә барып хәл итеү тейешле. Бер нисек тә һеҙгә ярҙам итә алмайым" - тигәнерәк һүҙҙәр көткәйнем.

Өфөләге яуаплы сәркәтип тә башҡорт кешеһе булып сыҡты. Минән йәшерәк тә ине булһа кәрәк (миңә ул саҡ ҡырҡ йәш тә юҡ ине). Уны төп корпус янында, тышта осраттым. Нәҡ әлеге һымаҡ уҡ был егеткә лә мөрәжәғәтемде еткерҙем. Ҡайҙалыр ашығып китеп барған булыуына ла ҡарамаҫтан, туҡтап, мине иғтибар менән тыңланы. Хатта фамилия, исемдәрҙе лә яҙып алды һәм: "Ике көндән ҡабул итеү комиссияһы ултырышы була, шунда һеҙҙең һорауығыҙҙы мотлаҡ күтәрәсәкмен", - тигәнерәк һүҙҙәр менән матур итеп яуап бирҙе. Һаубуллашты ла, артабан юлын дауам итте. Ә киләһе осрашҡанда беҙҙең мәсьәләбеҙҙе нисек хәл иткәндәрен ентекләп һөйләне. Комиссия ултырышында ректор (Тимербулатов ине булһа кәрәк) үҙе сығыш яһаған икән: "Хәрби гарнизондан килгән был абитуриентҡа, башҡа ватандаш медалистар менән бер рәттән, "тестирование"ға рөхсәт биреү кәрәк. Ата-әсәһенең хәрби хеҙмәттә булыуы уға беҙҙең вузға инеүгә ҡамасауламаһын..." - тип әйткән. Уның ошо һүҙҙәрен әлеге сәркәтип егеттән ишетеү беҙҙең өсөн оло шатлыҡ булды. Тесты уңышлы ғына үтеп, имтиханға ла барып етмәйенсә, улым университетҡа инеп тә китте...

Бына шулай, ҡәҙерле туғандар, ниндәй генә хәбәр булмаһын, башҡаларға уны мөмкин тиклем матурыраҡ формала еткерергә өйрәнәйек. Ҡыҫҡа ғына ошо ғүмеребеҙҙә бер-беребеҙгә йылы һүҙебеҙҙе бер ҡасан да йәлләмәйек. Үҙемдең баштан үткән хәлдәрҙе иҫкә алып, бер урынға йыйып һөйләгәс тә, ғүмер буйы шундай күңелһеҙ хәлдәргә генә юлығып торған икән был автор, тип уйлай күрмәгеҙ. Кешеләргә гүзәл мөғәмәле яҡташтарыбыҙ, бәхеткә, тирә-яғыбыҙҙа ифрат та күп. Һаулығым буйынса эшкә ярамағанымды яҡшы белеүҙәренә ҡарамаҫтан, миңә ҡала дауаханаһындағы үҙҙәре етәкләгән бүлектәрендә табип эше тәҡдим итеүсе коллегаларым да бар. Һәр саҡ ихлас, алсаҡ йөҙлө был яҡташтарыма тик ихтирамым ғына арта. Хатта министр портфелен биргән хәлдә лә, минең инаныуымса, улар ғүмер буйы үҙ асылында, йәғни, ябай кеше булып ҡаласаҡ. Бына шундайҙар хаҡында иң яҡшы иҫтәлектәр генә һаҡлана.

Яғымлылыҡ кешелә иң тәү нәүбәттә ата-әсәһе тарафынан, бала сағынан уҡ тәрбиәләнергә тейештер. "Ана һөтө менән инмәгән - тана һөтө менән инмәҫ", тигән боронғолар. Элегерәк өлкәндәр балаларына "Бүтәгәнән түбән бул", тип аҡыл өйрәтә ине. Быны, әлбиттә, "кеселекле бул", тип аңлау ҡатмарлы түгел. Үҙебеҙҙең ауыҙҙан сыҡҡан һәр матур һүҙ үҙебеҙҙе үк шатландырырлыҡ булһын. Тормош йәменең мөһим булған бер яғы тап ошо ла баһа.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

***✓ Был юлы айғыр старшинаның салғыйын умыра тешләп алды ла тешенә эләккән буҫтау киҫәген ергә төкөрҙө. Эскадрон "пырх" итеп көлөп ебәрҙе. Старшина атҡа ҡарата бер ниндәй ҙә тупаҫлыҡ күрһәтмәне.***



Рамаҙан ӨМӨТБАЕВ

# АТЛЫ БАШҠОРТ

Повесть

Ул хәрәкәтһеҙ ятҡан бер немецты ашатлап үтте лә, "Ура!" ҡысҡырып һуғышсылар менән түбәнгә атлыҡты. Дошман икенсе һыҙыҡ траншеяла нығынып ҡалыу өсөн киңерәк ара ҡалдырырға ашыҡты. Әммә тәүге уңыш менән дәртләнгән ҡыҙыларм еецтарҙың алдағы төркөмө икенсе һыҙыҡ траншеяға бәреп инә башланы. Көтмәгәндә Заһретдин алдында тирә-яғы әлморон, селек ҡаплаған тәрән генә соҡор пәйҙә булды. Был шунда уҡ уңға ялтайҙы. Ҡапыл уның алдына соҡор түгел, йәшел каска кейгән, ауыҙын арандай асып, зәңгәр күҙле һонтор немец ҡалҡып сыҡты. Билендә ялпаҡ алюмин котелок, яурынына дүрткел ранец аҫылған. Бына ике һалдат: береһе - илбаҫар, ә икенсеһе, үҙ илен һаҡлаусы, күҙмә-күҙ осрашты.

Заһретдин шаҡ ҡатып торған немецҡа ташланды. Тегенең дә, Заһретдиндың да запас обойма сығарып мылтығын яңырға ваҡыты ҡалмағайны. Ҡапыл хәнйәр штыгын Заһретдинға һуҙған фашистың мылтығын ул бөтә көсөнә бер яҡ ситкә һелтәне лә, запас полкта өйрәткәндәренсә, "длинным с выпадом коли!" - тип үҙ-үҙенә команда биргәндәй булды. Аҙымын киң баҫып, уң тубығына сүкте лә немец ҡабырғаһына штыгын ҡаҙаны. Теге ҡанға мансылған ҡулдары менән үлемесле йәрәхәтен баҫып бөгәрләнеп йығылды ла әсе тауыш сығарып тыпырсынырға тотондо. Ярһыған Заһретдин: "Быныһы Маһитабым өсөн!" - тип уйларға ла өлгөрмәне, кемдер мылтығын ҡулынан бәреп төшөрҙө. Немец бит! Иҫерек шаҡшы ауыҙын йырҙы ла битенә мыҫҡыл ҡатыш йылмайыу йүгертеп: "Коммен-коммен, швайн", - тип ике буш ҡулын ҡайҙа ҡуйырға белмәй торған Заһретдинды үҙенә саҡырҙы. Был бер аҙым ситкә ялтанды ла ике ҡулы менән ҡоралды фашистың боғаҙына йәбеште. Шул секундта Заһретдиндың эсен яндырып ниндәйҙер йылы шыйыҡса аҡты. Күҙ алды ҡараңғылана башланы, күңеле болғанып ҡоҫҡоһо килде. Һауала йөҙгән болоттар нишләптер түбәнгә түңкәрелде, аяҡ аҫтындағы ер уйылып аҫҡа төшә башланы. Һүнеп йомола башлаған күҙҙәрен күккә, күк көмбәҙендә армыт-армыт булып һуҙылған Ирәндек тауҙарына оҡшаған болоттарға төбәне. Шул болоттар артынан алыҫта тороп ҡалған тыуған төйәгенә һуңғы сәләмен әйтәһе килде. Һалдат тора-бара, бөтөнләй иҫен юйҙы. Рядовой Заһретдин Ватандың бер бәләкәй генә киҫәген тәшкил иткән таҡтөйө, һөйгән Маһитабы өсөн өнһөҙ генә донъянан китте.

Шулай итеп, ире фронтҡа китеп, бер ай ваҡыт үтеүгә, Маһитап уның командирҙары яҙған хатты алды. "Иҫәнмеһегеҙ, Маһитап Мирғәлиевна! Ҡайнар сәләм тапшырғандан һуң часть командованиеһы һәм уның политик бүлеге үтә ҡайғылы хәбәр еткерә, һеҙҙең ирегеҙ, рядовой Итәлмасов Заһретдин, 1902 йылда Ялан ауылында тыуған, сентябрҙең 30-сы көнө Усть-Хоперск ҡалаһының көнбайышында 217,4 ҡалҡыулыҡ өсөн барған аяуһыҙ һуғышта, тиңдәшһеҙ ҡаһарманлыҡ күрһәтеп, батырҙарса һәләк булды. Атакаға ташланған беҙҙең сафтарҙың беренсеһе булып ул дошман траншеяһына бәреп инде. Ҡул һуғышында штыгы менән ике фашисты дөмөктөрҙө. Өсөнсөһө менән үлемесле алышҡан саҡта арттан атылған дошман пуляһы уның ғүмерен өҙҙө, мәгәр йән биргән саҡта ул фашисты ҡулынан ысҡындырманы, быуып үлтерҙе. Уның батырлығы тураһында "Ватан өсөн" гәзитендә баҫылып сыҡҡан мәҡәләне һеҙгә иҫтәлек итеп һалабыҙ. Уның шәхси әйберҙәрен почта аша алырһығыҙ. Һеҙҙең ирегеҙ рядовой Итәлмасов күрһәткән батырлыҡтары өсөн үлгәндән һуң орденға күрһәтелде. Хөрмәтле Маһитап Мирғәлиевна! Һеҙ ирегеҙ рядовой Итәлмасовтың ҡаһарманлығы өсөн хаҡлы ғорурлана алаһығыҙ. Немец фашистарына - үлем!

Уны Усть-Хоперск ҡалаһынан көнбайыштараҡ, 30 км ерҙә, үҙе һуғышып алған 217,4 ҡалҡыулыҡ битендәге туғандар ҡәберлегенә оло хөрмәт менән күмдек.

Часть командиры
полковник Яровой.
Политбүлек начальнигы
подполковник Нагорный".

## VII

Бөгөн төндә Ғилмишәрифтәр станцияға килгән аттарҙы бушатырға барҙы. Теплушкаларҙа килеп аяҡтары, кәүҙәләре ойоған меҫкен аттар ҡыя түшәлгән таҡтанан ергә төшә алмай интекте, үҙ-ара иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡан шикелле, кешнәшеп алды. Ергә төшкәс тә, ойоған аяҡтарында тора алмай кәүҙәләре менән ҡалтыранды, ә ҡайһы берҙәре шунда уҡ ергә йығылып, аунарға кереште.

Ғилмишәриф нуҡта чумбурынан тотоп сығарған ат уны күреү менән әкрен генә кешнәне лә таҡтанан төшкән саҡта, ирендәрен дерелдәтеп, ҡултығына башын тығырға маташты. Буйы-һынына, ҡойроҡ-ялына ҡарап Ғилмишәриф атты төҫмөрләргә лә самалағайны, ләкин бөтә ергә өлгөргән Заровняевтың: "Тиҙ ҙә тиҙ!" - тигән фарманы ентекләп ҡарарға мөмкинлек бирмәне. Етмәһә, ҡараңғы. Шулай ҙа ат уның артынан бер аҙым да ҡалмай йылы тынын уның елкәһенә бөркөп килә бирҙе. Хатта һарайға инмәй, аяҡтары менән ер сапсып быны уның артынан китергә ынтылды. "Был ни ғәжәп! Әллә мине таныны инде был хайуан?" - Ғилмишәриф бер аҙ аптырап торҙо ла казармаға атланы.

Башҡа яҡтарҙа сентябрҙә лә ҡояшлы, йылы көндәр була, ә бында төньяҡ Урал тауҙарына тартым ерҙә, сентябрь айы һалҡынса була. Бигерәк тә иртә менән, күҙгә төртһәң күренгеһеҙ ҡараңғы төндөң таңға ялғанған сағында, ҡырау төшә лә ер өҫтөндәге уйһыу ерҙәрҙә йыйылып ятҡан күләүектәрҙе бер аҙ туңдырып, шөкәрә генә боҙ менән ҡаплап та ала. Бындай хәл һалдат халҡы өсөн бик шәп ваҡыт түгел. Ни көҙ, ни йәй. Әле йәйге форманы ҡышҡыға, йәйге норманы ҡышҡы нормаға - паекка алмаштырмаған осор, иртәлекисле асҡаҡ һалдатты һыуыҡ бөрөп ала. Көнө лә йонсоу, һалдаттың да йәйге учениеларҙан үшәтләнеп талсыған сағы. Башҡа яҡтарҙа сентябрь айы икмәктең, йәшелсә, еләк-емештең өлгөргән сағы, муллыҡ айы. Малы ла, әҙәме лә оҙайлы ҡыш бауырына әҙерләнә, елеге май йыя. Ә бында нимә? Бер картуф, уныһын да, нигеҙҙә, станцияла үткән-һүткән поезд халҡына һаталар. Казармала ятҡан һалдаттарға өсөнсө нормаға тәғәйен аҙыҡ-әүҡәттән башҡа нәмә эләкмәй.

Бына бөгөн дә шундай бер ҡыраулы иртәлә старшина Заровняев "подъем" иғлан итте лә сәғәтен усына тотоп иҙән уртаһына баҫты. "Бер ҡараһаң, әҙәм аптырамалы инде был старшина", - тип хайран ҡала Ғилмишәриф. Был ни хикмәт? Һимермәй ҙә, ябыҡмай ҙа, бөтә кешенән һуң ята, иртә тора, ә тышҡы рәүешен ҡарасы: әйтерһең дә, кейгән кейемен кемдер иртүк кәлепләп, һылап-һыйпап биреп тора. Өҫтөндә бер сырыш юҡ, гимнастеркаһына таҡҡан еҙ төймәләре ҡыуыҡһыҙ зәғиф шәм яҡтыһында ла, бесәй күҙе шикелле, баҙлап тора. Башын аҫҡа эйһә, күләгәһе йып-йылтыр итеп таҙартылған итеге йөҙөндә сағылып китә. Ә яҫы ҡайышының еҙ айылы ялтлап балҡып тора, ә шпорҙары! Шул беҙ йөрөгән бысраҡтан йөрөй, беҙ тапаған ерҙе тапай ҙа баһа, бер ниндәй суҡраҡ та йәбешмәй микән бының тылсымлы итегенә?

Иртән, Ғилмишәрифтең ашҡынғанын һиҙенгәндәй, старшина уларҙы туп-тура ат һарайына алып китте. Килгәс тә, яңы аттарҙы урамға сығарып ҡулсаларына бәйләргә ҡушты. Ғилмишәриф кисәге атты бәйләгән денникка атлыҡты. Килеп инеү менән ишек аша башын һалып торған аҡ йондоҙло атҡа күҙ ташлауы булды, йөрәге һикереп китте, күҙенән бер нисә бөртөк шатлыҡ йәше бәреп сыҡты. Уның алдында "Ҡыҙыл ялан" колхозының өйөр айғыры Әүхәҙи тора ине.

Ишекте емереп сығырҙай булып тыпырсынған бурыл айғыр күҙҙәрен еүешләтеп, ҡылған төҫлө ял ҡаплаған муйынын Ғилмишәрифтең яурынына һалды. Ҡалтыранған ирендәрен элекке көтөүсеһенең күкрәгенә терәне. Әүхәҙи тыуған яҡтан сәләм тапшырырға, хәл-әхүәлен һөйләргә теләгәндәй, башын сайҡап алды ла Ғилмишәрифтең икенсе яурынына үрелде. Элекке көтөүсеһе генә өнһөҙ тора һәм атын ҡосаҡлап һөйә ине.

Аттарҙы сығарып бәйләнеләр. Старшина башта уларҙы урап ҡарап сыҡты. Йөрөнө-йөрөнө лә бөтә аттарҙан да берҙәй айырылып торған Әүхәҙи янына туҡтаны. Морононан һыйпарға уйлағайны ла, айғыр муйынын һуҙып, ҡолаҡтарын шымайтты. Күрәһең, күпте күргән старшина аттың кәйефен шундуҡ аңланы.

- Сильный конь, с норовом, - тип ситкәрәк китеп ҡарап торҙо ла, әүрәтергә тырышып, ауыҙ эсенән әллә ниҙәр һөйләнә-һөйләнә, ҡулын һоноп янына яҡынлашты. Был юлы айғыр старшинаның салғыйын умыра тешләп алды ла тешенә эләккән буҫтау киҫәген ергә төкөрҙө. Эскадрон "пырх" итеп көлөп ебәрҙе. Старшина атҡа ҡарата бер ниндәй ҙә тупаҫлыҡ күрһәтмәне: "Но ничево, ағайындар һинән былайыраҡтарҙы ла өйрәткән кеше әле", - тип үҙен тынысландырҙы.

Шул арала Әүхәҙи нуҡтаһының чумбурын тартып өҙҙө лә теҙелеп торған эскадронға табан китте. Ҡыҙыларм еецтар ҡаса башланы - ҡурҡтылар. Ә Әүхәҙи, муйынын һуҙып, Ғилмишәриф эргәһенә килеп туҡтаны, томшоғон уның күкрәгенә ышҡырға тотондо. Бөтә эскадрон аттың был серле ҡылығына аптыраны. Ғилмишәриф айғырҙың муйынынан ҡосаҡлап нуҡтаһынан ғына тотто ла бүрәнәгә килтереп бәйләне. Старшина уның эргәһенә осоп тигәндәй килеп баҫты ла:

- Ҡыҙыларм еец Яуымбаев, быны нисек аңларға? Мине умырып тешләп алды, ә һиңә иркәләнә!

- Был беҙҙең колхоздың гүләүәй йылҡыһының өйөр айғыры Әүхәҙи - "Ворошиловсы һыбайлылар" түңәрәгендә менеп өйрәткән атым.

Старшина ҡыҙыларм еецтың һүҙенә ышаныр-ышанмаҫ ҡиәфәттә:

- Улай булғас, был айғыр тураһында бөтә мәғлүмәттәрҙе әйтеп сыҡ, - тине.

Ғилмишәриф бөтә кеше ишетерлек итеп:

- "Ҡыҙыл ялан" колхозы, 1938 йылдан алып РККА фонды, төҫө бурыл, маңлайында аҡ урайы - йондоҙо бар, айғыр, исеме Әүхәҙи, атаһы - Әбүбәкир, инәһе - Хаҙыя, таҙа ҡанлы башҡорт тоҡомонан, 1935 йылдың 25 апрелендә тыуған. Тыштан артҡы уң аяғы өҫтөндә "ФКА" тигән, йәғни "Фонд Красной Армии" тигән тамғаһы бар. Промерҙарын әйтәйемме?

- Бейеклеген генә әйт тә...

- Бейеклеге мундаһынан ергә тиклем 170 сантиметр.

- Барыһы ла дөрөҫ. Хатта паспортында күрһәтелмәгән тыуған көнөн дә әйтеп ҡуйҙы, - тине ветврач.

Сит ерҙә ауылдашы, хатта үҙе атланып йөрөгән аты менән осрашыуына Ғилмишәриф кенә түгел, бөтә эскадрон шатланды. Тик эскадрон өсөн был дөйөм шатлыҡ ғәрсел, көнсөл старшина - "ат профессоры" Заровняев күңеленә бер таш булып ятты. Ошо сәғәттән алып Ғилмишәрифкә булған мөнәсәбәте ҡырҡа үҙгәрҙе. Ә үҙе Әүхәҙигә атланып, ҡала урамынан саптырып үтеү теләге менән яна башланы.

- Кисә килгән аттарға биш көн карантин! Устав буйынса карантин ике аҙна булырға тейеш. Ләкин срокты ҡыҫҡартабыҙ, ошо карантин мәлендә ат һарайына инеп, буталып йөрөүҙе ҡәтғи тыям! - тип иғлан итте бер аҙ баҫыла төшкән старшина. Һуңғы һүҙенең бигерәк тә Ғилмишәрифкә ҡарай әйтелгәнен бөтә кеше аңланы.

Ғилмишәриф, тойғоһона бирелеп, армияла йәшәп килгән икенсе бер тәртипте хәтеренән сығарҙы. Кемдең дәрәжәһе юғарыраҡ, шул кеше кавалерияла яҡшыраҡ атҡа атлана. Бармағы менән төртөп күрһәткән шул ат - начальниктыҡы. Армияла кешеһен дә, атын да үҙ начальниктарын хөрмәтләргә өйрәтә торған борон-борондан килгән йола, тәртиптәр етерлек. Башта үҙҙәрен яҡшылыҡ менән яраттырырға тырышалар, улай барып сыҡмаһа, башҡа юлдары ла бар.

**(Дауамы. Башы 29-33-сө һандарҙа).**

# ХАЛЫҠТАН АЛЫП,

## кире халыҡҡа ҡайтарыу бәхет ул!

**Замана шулаймы, бөгөн берәүҙәр тиреләренән сығырҙай булып, лайыҡлымы-лайыҡһыҙмы, ҡыҫыр лайктар, яһалма дан артынан ҡыуа, икенселәрҙе дан үҙе эҙләп таба. Халыҡ һөйөүе, ысын баһа һәләтлеләр, егәрлеләр, ихластар артынан эйәреп йөрөй. Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, билдәле хореограф-балетмейстер Гөлназ Вәкил ҡыҙы АҠНАЗАРОВА менән һөйләшкәндә уның ихласлығы хайран итте.**



### Боронғо сәнғәт

Бейеү - иң боронғо сәнғәт төрҙәренең береһе, уның хәрәкәттәре йырға, телгә тиклем үк барлыҡҡа килгән. Кешеләр бер-береһе менән аралашып, мәҫәлән, һунарға йыйынғанда, йә һуғышҡа киткәндә төрлө хәрәкәттәр яһап, үҙҙәрен еңеүгә көйләгәндәр. Һунарға барам, айыу алам, мин - көслө, тип, һунарсы тәнен, аңын нығытҡан. Шуға ла бейеү хәрәкәттәре бөтә халыҡтар өсөн дә хас. Һуңыраҡ бейеүҙәр йыр-моң менән үрелеп, бейеү сәнғәте булып киткән. Хәҙер беҙ күнеккән бейеү хәрәкәттәренең һәр береһенә элек тәрән мәғәнә һалынған. Башҡорт хореография сәнғәте, байрам-йола мәҙәниәте буйынса мәҡәләләр һәм монографиялар авторы Нагаева Лидия Ислам ҡыҙы үҙенең хеҙмәттәрендә был турала бик асыҡ итеп яҙған. Мәҫәлән, "Ҡарға бутҡаһы", "Кәкүк сәйе" кеүек боронғо йолаларҙы атҡарғанда ҡатын-ҡыҙҙар ғына бейегән, ир-егеттәр ҡымыҙ эсеп, ҡурай тартып, айырым бейегәндәр. Ҡыҙҙар музыкаль инструменттар ҡулланмайынса ауыҙ эсенән көйгә тартым өндәр сығарып, ауыҙ ҡумыҙына бейегән. Ваҡытында шундай бейеү һалыу ниәтем бар ине. Атҡарырбыҙ, Аллаһ бойорһа!

### Аманатҡа тоғролоҡ

Профессиональ сәхнәгә башҡорт бейеүҙәрен Фәйзи Ғәскәров алып сыҡҡан. Элек һәр төбәк башҡорттары үҙҙәренә генә хас хәрәкәттәр менән үҙ көйҙәренә бейегән. Мәҫәлән, "Киндер туҡмау" бейеүендә "Арғаяш Заһиҙаһы", "Арғаяш йәштәре" көйҙәре әле лә бар. Пермь өлкәһе башҡорттары бөтөнләй икенсе төрлө бейей, һамарҙар үҙҙәренсә үҙенсәлекле, ырымбурҙар Урал аръяғы башҡорттарына оҡшатыңҡырап, баймаҡса, ейәнсураса, хәйбулласа бейейҙәр, әммә уларҙың көйҙәре үҙенсәлекле. Бөтөн матурлыҡты фольклор төркөмдәре һаҡлап килә. Бигерәк тә пермдәрҙең үҙҙәренең башҡорт теле диалектын һәм бейеү серҙәрен һаҡлап килеүе һоҡландыра. Фәйзи Ғәскәров иһә, ана шул айырым үҙенсәлектәрҙе дөйөмләштереп, башҡорт бейеүен профессиональ сәхнәгә сығарып, донъя кимәленә күтәргән. Мин дә ҡайҙа барһам да, ҡарайым, күҙәтәм, күрәм: йырҙарҙың көйөн, тарихын йырауысылар отоп алып киләһе быуынға еткергән кеүек, бейеүҙәр ҙә киләһе быуынға тапшырылырға тейеш. Бейеүсе кешегә йырҙы отоп алыуы ҡыйын, йырсы кеше бейеүҙе тиҙ генә отоп ала алмай, шуға һәр өлкәнең оҫталары халҡыбыҙҙан ҡалған аманатты һаҡларға бурыслы.

### Баһа алдан йөрөмәй

Аллаһҡа шөкөр, республикабыҙҙа бейеү сәнғәте үсешкән, һәр бер районда бейеү коллективтары тупланған, Сибай ҡалаһында ғына утыҙлап бейеү ансамбле бар. Рәсми рәүештә өлгөлө тип танылған халыҡ бейеүҙәре ансамблдәре күп. Беҙҙә йыр сәнғәтен дә, бейеү сәнғәтен дә берҙәй яраталар. Талантлы балейтмейстерҙарыбыҙ үҫеп килә - был бик ҡыуаныслы! Йәүҙәт Бикбирҙин соло бейеүҙәр һалыуға бик оҫта ине. Мин үҙем был йүнәлештә маһир түгелмен. Соло бейеүселәребеҙ бар, яңғыҙ башҡарыусыларға бейеү һалыусылар һирәк. Ә бит яңғыҙ башҡарыусылар һәр бер коллективта бар, билдәле булыу өсөн ваҡыт кәрәк. Мәҫәлән, Йәүҙәт Бикбирҙин дә, Мөхәмәт Иҙрисов та бейеп-бейеп, исемдәре аҙаҡ сыҡты, сөнки баһа алдан йөрөмәй, аҙаҡтан килә. Рәшиҙә Туйсина ла дәүләт ансамблендә бейегәндә билдәлелек алһа ла, ансамблдең солисткаһы булып ҡала килде. Ваҡыт үткәс, анализ эшләгәндән һуң ғына аңлайһың, уның һымаҡ бейеүселәр, бейеү алиһәләре һирәк - "Заһиҙә"не, мәҫәлән, Рәшиҙә Туйсинаға еткереп бейеп булмай. Ғәҙәттә, солистарҙы коллективтан айырып ҡарай башлайҙар, сөнки күмәк бейеү эсендә улар айырылып тора. Элек Фәйзи Ғәскәров ансамблендә солистар күберәк ине, ундай оҫталар аҙаҡ бейеү һалыусы булып китте, коллектив бейеүҙең эсендә улар башҡаларҙан айырылып тора ине. Әле "Сибай" халыҡ бейеүҙәре ансамблендә лә үҫеп килә шундай йондоҙҙар, тик әлегә мөҙҙәттәре етмәгән, уларҙы борсоп, күҙ тейҙерергә ярамай. Булыр бала бишектән, тигәндәй, улар ваҡыт һынауын үтеп балҡыясаҡ. Мәҫәлән, Урал Мортазин, Фәйзулла Ғөбәйҙуллиндәр солист булып, исемдәре республика кимәленә сыҡты. Сулпан Аҫҡарова балетмейстер, солистка ғына түгел, режиссер булып эшләй бөгөнгә көндә.

### Өфө - Сибай юлдары

Башҡорт дәүләт университетында эшләп йөрөгән осорҙа Йәштәр һабантуйында тап итеп, Әлмира Шәриф ҡыҙы Ҡыуатова менән Фәтих Салауат улы Хәснитдиновтар: "Сибайҙа филармония асыласаҡ, һин бит Баймаҡ ҡыҙы, ҡайтаһыңмы?" - тип мөрәжәғәт иттеләр. Шулай итеп, Азамат Тимеров, Нәсимә Тимерова, Лилиә Ишемйәрова, Саньяр Мәүлетҡоловтар Сибайға ҡайттыҡ. Ул заманда ҡаланы етәкләгән Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтов Әлмира Ҡыуатованың идеяһын хуплап, Мәҙәниәт министрлығы менән һөйләшеп, Сибайҙа филармония асайыҡ, Урал аръяғында мәҙәни үҙәк булһын, тигән ҡарарға килгәндәр икән. Кешеләр табығыҙ, саҡырығыҙ, фатирлы итәм, бина бирәм, тигән ҡала башлығы. Һәр берегеҙгә фатир бирәләр, тигән вәғәҙәгә ышанып ҡайттыҡ. Әйткән һүҙҙәре дөрөҫ булды, бөтәбеҙгә лә фатир бирҙеләр, баҡсалы иттеләр, Зиннур Ғөбәйҙулла улы һәр саҡ ярҙам итеп торҙо. Ҡала филармонияһы ғына булып асылғас, башта мәҙәниәт бүлегендә артист булып ставкала торҙоҡ. Бина мәсьәләһенә килгәндә, Тәҙеүселәр һарайында эш башланыҡ. Бейеү залы һәм ике кабинет беҙҙең ҡарамаҡҡа бирелде, сәхнә юҡ, ҡала мәҙәниәт һарайында сығыш яһай торғайныҡ.

Бер йыл шулай эшләнек, башта эш хаҡы ала алмай, кешеләрҙе эшкә урынлаштыра алмай ыҙаланыҡ. Бейеүселәрҙе урамдан йыйҙым, тиһәң дә була. Мөмкинлектәрҙән сығып, әле профессиональ сәхнәгә ныҡлап аяҡ та баҫмаған, сәс тә үрә белмәгән ҡыҙҙарға бейеүҙәр һалырға тура килде, аҙаҡ уларҙың күптәре дәүләт ансамбленә күсте. Мәҙәниәт министрлығы икенсе эшкә күсергәнсе ун өс йыл етәкләнем был ансамблде, ситтә булһам да, бәйләнеш әле лә өҙөлмәй. Бер бейеүҙе һалһаҡ, киләһе йылына ҡабатламай торғайныҡ, шулай йылына өс-дүрт бейеү ҡуйыбыҙ, яңы программаларға яңы бейеүҙәр барлыҡҡа килә, дәртләнеп эшләнек, яңылыҡ коллективҡа ла, үҙебеҙгә лә ҡыҙыҡ булғандыр. Хәҙер шул алтын фондты тергеҙеү ваҡыты етте, әлбиттә, яңы бейеүҙәр ҙә ҡуйырмын, тип уйлайым.

### Моңға сарсау

Төрлө төбәктәрҙә йәшәгән милләттәштәребеҙгә хас булған үҙенсәлектәрҙе һаҡлап бейеү һалыу ғүмерлек хыялым булып ҡала килә. Һәр төбәк шул тиклем үҙенсәлекле! Мәҫәлән, "Эх, ҡымыҙы, ҡымыҙы!" бейеүен алайыҡ. Ул беҙҙең Урал аръяғына хас бейеү. Костюмдар өсөн дә, түбәтәй кейҙергәнгә лә әрләнеп тә бөттөм. "Киндер туҡмау" - силәбеләрҙеке, унда уларҙың үҙенсәлектәре ярылып ята. Ниңәләр, башҡорттарҙың милли кейеме улай булмай, тигән фекер һаҡланып килә. Күрәһең, шул осорҙа уҡ алдан күҙаллағанмын, бөгөн милли үҙенсәлектәр кире тергеҙелде. Сибайҙағы репертуарыбыҙ Урал аръяғы бейеүҙәренә нигеҙләнеп һалынды, сөнки тыуған яҡҡа ҡайтҡас, аптырап ҡалдым, шулай ҙа була икән, әйтерһең дә, алтын ҡаҙнамы ни, һәр атлап йөрөгәнгә, ҡунаҡта күргәнгә, үҙешмәкәр сәнғәттә ҡатнашҡан бейеүселәрҙе ҡарағанда иҫаҡыл китә - шундай ҙа хәрәкәттәр, көйҙәр бар икән! Моңға сарсаған кеше һымаҡ, яңы тәьҫораттарға туя алмай инем. Күңелем идеяларға тулды, күп йөрөнөм, күрҙем, унда бер хәрәкәт алам, бында икенсеһен - халыҡтан алып кире халыҡҡа ҡайтарыу маҡсатым нығынды. Бик рәхмәтлемен юлымда шундай кешеләр осрауына. Башҡорт бейеү сәнғәтен профессиональ кимәлдә күреүемә бәхетлемен. Әле республикала ошо эште дауам иткән йәштәр булыуы ҡыуаныслы. Туймазынан Дамир Ибраһимов (ул беҙҙең Сибай егете) менән Ҡырмыҫҡалынан Артур Юлыевтарға (ул да беҙҙең егет) һоҡланам, беҙҙең мөхиттә үҫеп, бер системала өйрәнгәнгә, үҙҙәренең юлын табып, матур балетмейстерҙарға әйләнеп баралар. Балетмейстерҙар юҡ, бейеү сәнғәтен күтәреүселәр юҡ, тиҙәр, нисек булмаһын? Сулпан Аҫҡарова, Урал Мортазин, Йәмил мәрхүм Йәнбәков, Айтуған Дәүләткирәев, Йәмилә Бикбаева Мәскәүҙә балейтмейстерға уҡып ҡайттыҡ, иң һыҙғанып эшләнек.

### Сибай бай ҡала

Коллективтарҙы дәрттә, тонуста тотоу өсөн бейеү сәнғәтен һүрелдермәй торған "Байыҡ" конкурсы, фанаттарыбыҙ бар, уларҙы һәр ауылдан табырға була. Ирҙәрҙе туплау ауырыраҡ, әлбиттә, хатта профессиональ коллективтарҙың эшендә лә. "Сибай" халыҡ бейеүҙәре ансамблен Мәҙәниәт министрлығына күсергәс, эш еңеләйҙе. Ул заманда мәҙәниәт министрлығын етәкләгән Хәләф Хәлфетдин улы Ишморатов, сәнғәтте аңлаған кеше булараҡ, яҡшы ставкалар булдырыуға ярҙам иткәс, профессиональ бейеүселәр эшкә килә башланы. Сибай ҡалаһы хакимиәтенә ҙур рәхмәт, йыл һайын фатирҙар бирҙеләр, йәштәр килә торҙо. Ике театр, филармония - өс профессиональ коллектив мәҙәниәт өлкәһендә ҙур эш атҡара. Уларҙан тыш, Сибай институты, сәнғәт колледжы барлығын онотмайыҡ - һәр береһе ҡаланы байытты, Урал аръяғына ғалимдар ҙа, сәнғәт кешеләре лә килде, үҙенсәлекле, үҙ алымдары булған яңы коллективтар тупланды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Ата-бабаларыбыҙ бер көн менән йәшәмәгән, йәшәйешен мәңгелеккә тоташтырып, киләһе быуынға рух-мәҙәни аманаттарын ҡалдырған, бурыс атҡарған. Тыныс ҡына, сабыр ғына, күсәгилешлекте һаҡлап, бер быуынды икенсеһе менән тоташтырған. Аллаһҡа шөкөр, быуындарҙы тоташтырыусы күперҙәр бар. Буласаҡ!**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**яҙып алды.**

✓ Тормош һынауҙарынан, әсе елдәрҙән, яуыз телдәрҙән уларҙы мин яҡларға, һаҡларға бурыслымын. Нимәгә миңә кешенең минең туралағы фекере, уйы? Ни эшләп мин кемгәләр нимәләр аңлатырға, аҡланырға, аңлашырға тейешмен?



ИНТЕРНЕТТАН



# ТОМАТ АШАУ МӘЛЕ

■ Калифорния университеты ғалимдары йоҡо туймауҙың кире эҙемтәләре бар, тип иғлан итә. Тикшеренеүҙәр 10 йыл барған, унда 50 йәштән өлкән 9 мең кеше ҡатнашҡан. Улар башлыса йоҡо туймауҙың физик әүҙемлеккә, аҡыл эшмәкәрлегенә нисек тәьҫир итеүен асыҡларға тырышҡандар. Көн буйына ныҡ әүҙем булып та, аҙ йоҡлаусыларҙың (6 сәғәттән кәмерәк) когнитив функциялары түбәнәйә. Ун йылдан һуң уларҙың аҡыл күрһәткестәре физик йәһәттән әүҙем булмаусыларҙыҡына тиңләшә. Быға тиклем ғалимдар спорт менән шөғөлләнеүселәрҙең хәтере яҡшы булыуын билдәләгәндәр. Әммә бының өсөн кеше тәүлегенә 8 сәғәт йоҡларға тейеш икән.

■ Табип-гастроэнтеролог Анастасия Левитская әйтеүенсә, организм өсөн ризыҡты йылы килеш ҡабул итеү яҡшыраҡ, сөнки уны эшкәртеү өсөн күп көс түгелмәйәсәк. Ә бына һалҡын аҙыҡҡа ҡарағанда ҡайнары яҡшыраҡ, сөнки юғары температурала күп кенә микроб һәм бактериялар юҡҡа сыға, ә токсиндар тарҡала. Ҡайнар аш тәндең эске температураһын күтәрә. Шуға ла һалҡын көндәрҙә ҡайнар ризыҡ ашап алғандан һуң кеше йылынып китә. Һөт һәм йомортҡаға аллергиялары булғандарға ла йылы аш файҙалы: термик эшкәртеүҙән һуң аҡһымдың структураһы боҙола, ә аҡһым ул аллерген сығанағы.

■ Роспотребнадзор августа-сентябрҙә күберәк томат ашарға кәңәш итә. Шулай уҡ баклажан, таш ҡабаҡ, татлы борос, кукуруз, брокколи, гәрәнкә, борсаҡ, дайкон, кольраби, кәбеҫтә организм өсөн файҙалы. Базилик, һуған, кинза, бөтнөк, петрушка, укроп, ҡуҙғалаҡ кеүек тәмләткестәрҙе лә оноторға ярамай. Емеш-еләккә килгәндә, рационға персик, абрикос, нектарин, слива, алма, груша, ҡауын, инжир, ҡарбуз, сейә, ҡурай еләге, һырғанаҡ менән мүк еләге өҫтәргә кәрәк.

■ Эҫе йәйҙә ҡояшта күберәк йөрөргә тура килә һәм тире тупаҫланып, төҫкә йәмһеҙләнеп китә. Фотоҡартайыу тип аталған был күренеште өйрәнгәндә ғалимдар тиренең өҫкө ҡатламын ғына тикшерә. Бингемтон университеты белгестәре үткәргән яңы һынауҙарҙа ультрафиолет тиренең башҡа ҡатламдарына нисек тәьҫир итеүен асыҡларға тырышҡан. Ҡояштан иң тәүҙә коллаген зыян күрә икән, тире УФ-нурланышын күберәк алған һайын, коллаген тығыҙая бара һәм тире кибеп, ҡата башлай. Тимәк, фотоҡартайыу эстетик проблема ғына түгел, быға еңел генә ҡарарға ярамай.

■ Аҙыҡ-түлектә, дауаханаларҙа, хатта үҙебеҙҙең тәнебеҙҙә йәшәүсе бактериялар тураһында беләбеҙ, әммә йорттарыбыҙ ни тиклем хәүефһеҙ һуң? Тикшеренеүселәр билдәләүенсә, аш бүлмәһе ошондай урындарҙың береһе булып тора. Унда абсолют стериллек тураһында һүҙ йөрөтөп тә булмай. Әммә төрлө аш-һыу бүлмәләрен тикшергәндән һуң, улар шундай фекергә килгән: кешенең ниндәй ризыҡҡа өҫтөнлөк биреүенә, уны нисек әҙерләүенә ҡарап, уларҙа бактериялар ҙа төрлө була. Ғалимдар донъяның 5 илендә 74 төрлө аш-һыу бүлмәһенең бактерияларын өйрәнеп, шундай һығымтаға килгән. Шулай ҙа һауыт-һаба йыуа торған губка, өҫтәл һөртә торған сепрәктәр бөтөн фатирҙарҙа ла берҙәй бысраҡ икән. Уларҙа бактериялар тиҙ үрсей, шуға ла был кәрәк-яраҡтарҙы йышыраҡ алыштырып тороу фарыз.

СӘХИФӘНӘН

# ЗӨЛФИРӘНЕ УҠЫЙЫҠ ӘЛЕ...



**Иғтибар иткәнегеҙ барҙыр, беҙ йыш ҡына уҡыусыларыбыҙға "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге сәхифәләрҙән ҡайһы бер авторҙарҙың яҙғандарын тәҡдим итәбеҙ. Социаль селтәрҙә оҫта, ҡыҙыҡлы итеп яҙа белгәндәр әллә ни күп түгел, ләкин улар беҙҙең баш мөхәррирҙең үткер күҙенән, иғтибарынан ситтә ҡалмай: Наилә Хәмбәлиева, Айһылыу Ғарифуллина һәм башҡалар. Шулай уҡ Йылайыр районы Сәләх ауылында йәшәүсе Зөлфирә Таһированың "Бәйләнештә"ге сәхифәһен дә рәхәтләнеп уҡыйбыҙ. Ауыл ҡатынының көндәлек мәшәҡәттәре, балалары менән булған тәрбиәүи мәлдәр, кешеләр менән үҙ-ара мөнәсәбәттәр тураһында шул тиклем оҫта итеп, тәмләп яҙа. "Их, бер шәп журналист йә яҙыусы булыр ҡәләм оҫтаһы йәшәп ята бит шул алыҫ төпкөлдәге ауылда", - тип уйлап ҡуяһың. Ә ул яҙмышынан ҡәнәғәт булып, һәр мәлдән, һәр осрашыуҙан, хатта көтөү ҡаршылауҙан, өйҙәренә килеп төшкән ҡунаҡтарҙан, балаларының бәләкәй генә уңышынан да ҡәнәғәт һәм бәхетле. Үҙегеҙ уҡып ҡарағыҙ әле уның сәхифәһенән ҡайһы бер яҙмаларҙы.**

## Йәм өҫтәп йәшәйек

Ауылыбыҙҙа шәп парк асҡайныҡ бит. Шунда Сибай филармонияһы концерт ҡуйып, беҙҙе йырлатып, бейетеп ҡайтып китте. Өйҙәге эштәр бөткәс, һыйыр һауылғас, тышта, саф һауала рәхәтләнеп бер йөрөп ҡайтылды.

Эйе, ауыл халҡына ундай-бындай кәйеф-сафа бик тәтемәй бит. Хәҙер артистар төпкөлгә килеп тә бармай. Үҙ күңелебеҙҙе үҙебеҙ асып, үҙебеҙгә үҙебеҙ концерт ҡуйып, саралар үткәреп, эләгә -тәгәрәй йәшәй бирәбеҙ.

Ә ауыл ҡатынының тормошо тәгәрмәс эсендә йүгергән тейенме, йомранмы кеүек. Таң һарыһынан күҙен тырнап аса ла, яулығын ябынып, түш тирәһе майланып ҡатҡан халатын кейеп, йәлпәшеп кенә көтөп ултырған калушын элеп, кәртә яғына тәпәйләй. Кәйеф булһа, һәүкәшен һөйөп ала, булмаһа "матур һүҙҙәр" менән "өшкөрөп" ебәрә. Һыйыр ҙа алйот түгел: беҙҙе ҡараштан аңлап тора. Артабан, күрше-тирәнең сепараторы тауышына һинеке лә ҡушыла. Унан быҙауға һөт эсерәһең. Ҡайтып килешләй өйрәк, ҡаҙ бәпкәләренең хәлен белеп сығаһың, ашарға бирәһең, һыу ҡояһың.

Һыйырҙарҙы этеп, һарыҡты ҡыуып сығарғас, һауыт-һаба менән айҡашып алаһың, унан инде өйҙәгеләр тороуға нимә бешерәйем икән, тигән мәсьәлә килеп баҫа. Уның араһында һөттө эшкәртеү, икмәк баҫыу, һыу индереү, йә сығарыу кеүек күнегелгән ваҡ-төйәк менән мәшәҡәтләнәһең. Ғаиләң уянып сығыуға бер талай эш башҡарып, армаһыҙ булаһың. Бына шулай көн дә бер тәртип менән көн артынан көн үтә, күҙ асып йомғансы йәй үтә...

Беҙҙең бер ҡалыпҡа һалынған тормошто йәмләп, ҡот өҫтәп, көс һәм дәрт биреп, рухландырып, күңелдәрҙе елкендереп китеүсе ябай артистар булыуы ҡыуандыра. Хәҙер ауылыбыҙҙа асыҡ һауала урынлашҡан, иркен, матур сәхнә бар. Бөтә йырсы, әртис халҡын көтөп ҡалабыҙ.

## Иң ҙур бәхет - бала

Картуф утаныҡ бөгөн, арытты. Шулай ҙа бәпестәремдең күңелен күрәйем тип, ҡунаҡ кеүек һыйланым. Пицца, картуфтан бәлеш, пирожки, былау бешерҙем. Элек бер үҙем бер баҡсаны утап, күмеп ҡайта торғайным. Аллаға мендән мең шөкөр, шәп балаларым бар.

Ошо арала төрлө күңелһеҙ хәлдәр булып алды. Көйәләнеп, илап та алдым, кәйеф тә булманы. Һәм ошо хәлдән һуң шундай һығымтаға килдем: минең иң ҡәҙерле кешеләрем, дуҫтарым, туғандарым - балаларым. Минең бөтә һөйөү хисем, иғтибарым уларға бирелергә тейеш. Тормош һынауҙарынан, әсе елдәрҙән, яуыз телдәрҙән уларҙы мин яҡларға, һаҡларға бурыслымын. Нимәгә миңә кешенең минең туралағы фекере, уйы? Ни эшләп мин кемгәләр нимәләр аңлатырға, аҡланырға, аңлашырға тейешмен?

Ошоно аңлағандан һуң, донъя яҡтырып китте. Хатта картуфлыҡты ҡый баҫҡанын, өйрәктәремдең ҡәҙимге күтәрелгәнен, иремдең ҡаҙ бәпкәһе алып ҡайтҡанын күреп ҡалдым. Донъя матур һәм сағыу төҫтәрҙән тора икән. Ярты көн буйы ҡаҙ бәпкәләрен ҡарап ултырҙым. Бәпкәләр бер-береһенең өҫтөнә баҫып китһә лә үпкәләмәй. Кешеләр ҙә шулай булһа икән. Берәүҙең башына баҫып ҡара әле, нимә булыр икән. Бәпкәнең береһе һыу эсендә рәхәтләнеп йөҙөп йөрөй, икенсеһе шуны эсеп китә. "Нимә унда йөрөп ятаһың, хәҙер мин нисек һыу эсәм!"- тип бола сығарып та йөрөмәй. Татыу ғыналар. Бер-береһенә һыйынып ҡына яталар...

Ҡыҙым менән оҙаҡ итеп һөйләшеп ултырҙыҡ. Ул шул тиклем төплө, матур фекерләй, кәңәш тә бирә белгән була. Аптырап ҡарап ултырҙым. Яңыраҡ ҡына "Война и мир"ҙы уҡып бөткән. Ҡыҫҡа вариантын да түгел, ә тотош романды! Эй, ҡанатланып шул әҫәрҙе һөйләй. Күҙем тоноп, шуны ла абайламай йөрөгәнмен. Балаҡайымды. Матурымды.

Был донъяла иң мөһиме - бала. Бала - бәхет. Ул һине әсәй иткән. Әсәй бәхетен кисерергә мөмкинлек биргән. Балаларым һау, атайлы һәм әсәйле булһын.

## Сепейҙәр "әсәһе"

Кисә ҡаҙ ите бешерҙем. Күптән ашаған юҡ ине, танһыҡҡа арыу булып ҡалды. Ҡоротлап тороп һурпаһын эсеп, төнгөләккә мыңҡандай булып килеп ятып йоҡлап кителде. Ауылда шул инде, көнө буйы элмәндәп эш менән булаһың да, тәмләп тороп ашап, тәгәрәп китәһең.

Уралиә ҡаҙ ите ашамай. Шуны бешерһәм, өйгә лә инмәй. Кисә бейем:

- Уралиә, инеп ит ашап, һурпа эсеп алһаңсы, - тигән булды.

- Юҡ, мин үҙ бәпәйҙәремдең итен ашап ултырмайым! - ти бит инде был.

- Атағатаҡ, ҡаҙ нишләп һинең бәпәйең булһын!

- Бәпәйем инде, өс көнлөк сағынан ҡарап үҫтерәм, көнө буйы яндарында ултырам, һәр береһенә исем ҡушам, үлһә - илайым.

- Улай булһа ла, ул һинең балаң булмай! - тип ныҡыша бейем.

- Саҡырһам - йүгереп киләләр, мине яраталар, тыңлайҙар! Родитель не тот, кто родил, а тот, кто воспитал! - тип тормаһынмы.

Эй, көлдөм инде. Йәлләй икән.

- Ашай алмайым мин уларҙы! Күҙҙәренә ҡарай алмайым. Беҙҙең шулай мәкерле икәнде улар белмәй бит! Ҙурайһағыҙ, һеҙҙе ашайбыҙ, тип үҫтерә алмайым бит инде...

Элегерәк үҙе үҫтергән һуғымлыҡты ашай алмаған кешеләр тураһында ишетә торғайным, хәҙер өйҙә сепейҙәрҙең "әсәһе" менән йәшәргә тура килә.

## Күстәнәсләмәй булмай...

Былтыр, Аллаһҡа шөкөр, картуф күп булды. Әле булһа ашап бөтөп булмай. Бөгөн картуф билмәне, өс босмаҡ бешерергә булдым. Мин ике төрлө ҡамыр баҫтым, күп итеп картуф әрсенем. Тышта ултырып әрсергә яратам. Эргәлә эләгеп-тәгәрәп бәпкәләр йөрөй.

Кисә мин уларға витамин алып ҡайтып эсереп, терелтеп ебәрҙем. Һикертә баҫып йөрөп яталар. Ҡуҡыш башындай ғына булһалар ҙа, өйрәкте сырылдатып таларға эшкинделәр. Өйрәк ҡаҙҙан, ҡаҙ тауыҡтан ҡурҡып, йөрөп яталар әле бер ишек алды булып. Сәскә-байғошҡа хут юҡ. Кемеһе тибеп төшә, кемеһе япрағын ашап китә. Анау несушкалар бигерәк холҡһоҙ икән. Ҡана, тағы нимәне боҙайыҡ, тигән кеүек, яман итеп ҡаш аҫтынан ҡарап йөрөйҙәр...

Иртәнсәк һыйыр һауа сыҡһам, өйрәк менән ҡаҙ һарайҙың таҡта тишегенән мине күҙәтеп бер була. Өйрөлтөп йөрөп ҡарап сығалар ҙа, кемеһенә ҡайһы тишек уңай, шунан баштарын ҡырын һалып, ҡарап тора бирәләр.

- Һеҙгә сират етмәй әле, тәүҙә һыйыр, шунан быҙау, шунан ғына һеҙ,- тип үтеп китәм.

Ваҡыт етеп, барып асһам, хәлдәре бөткәнсе ишек алдын арҡырыһынан буйына эт шикелле сабалар. Кемеһе эләгеп ҡолап ята, кемеһе төркөмдән тороп ҡалып, аҙашып алйып йөрөй. Үҙҙәре сарғалар бит әле: саҡ ҡына айырылып ҡалһалар ҙа паника башлана: "Кто я, что я, где я?"- тип борлап, йүгереп йөрөйҙәр. Картуф әрсеп бөткәнсе килеп итәктән дә тарталар, аяҡты ла суҡыйҙар. Саҡ ҡасып инеп киттем.

Индем дә иң беренсе өс босмаҡ бөрә башланым. Эслеге артып ҡалды ла ҡуйҙы. Шунан һыу ҡайнатырға ҡуйҙым да, картуф билмәне төрҙөм. Уныһының ҡамыры күп булған. Ғәҙәттә, бер нимә лә артмай торғайны. Ике малай, бейем өйҙә булмағас, әҙерәк бешерәм, тип уйлағайным, дөрөҫ иҫәпләмәгәнмен икән.

Кискә Зилә апай менән Нияз килеп төштө. Тәмле итеп тороп сәй эстек. Баяғы картуфтан уларға ла өлөш сыҡты, баҙға төшөп, тултырып алдылар. Улар үҙҙәре лә мул ҡуллы, шуға бер нәмә лә йәл түгел. Зилә апай һыйыр һауып, үҙенә тип өс литрлы банкаға тултырып алды. Холҡһоҙ несушкаларҙан да егерме дана күстәнәс тәтене. Эш бөткәс, тағы сәй эстек.

Мин уларға күстәнәс бирҙем, уның ҡарауы, улар миңә бер ҡосаҡ ромашка сәскәһе бүләк итте. Нияз еҙнә миңә тип еләк тә йыйып алып килгәйне...

Шулай итеп, тағы бер тығыҙ, әммә күңелле, матур көн артта ҡалды...

**Зөлфирә ТАҺИРОВА.**
**Йылайыр районы.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ТӘҺӘРӘТ НУРЫ



**Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) артынан барыусылар дини йолаларҙы үтәүҙе Аллаһы Тәғәлә менән яҡынайыу һәм уның менән аралашыу мөмкинлеге тип ҡараған. Йолаларҙы үтәү минуттары улар өсөн иң ҡәҙерлеһе булған, был ғәмәлдәренән күңелдәрен бер тулҡынға көйләп, тыныслыҡ, бәхет кисергәндәр. Хоҙайға табыныуҙы ҡабатланмаҫ шатлыҡ тип ҡабул иткәндәр һәм быны өсөн Аллаһҡа рәхмәт уҡығандар. Улар һәр ваҡыт тәһәрәттә - ритуаль таҙалыҡта булырға тырышҡан.**

● Бер ваҡыт иртәнге сәғәттә Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙ янына Билалды (радиаллаху анху) саҡырып: "Ниндәй ғәмәлең өсөн һин ожмахҡа минән иртәрәк индең? Төшөмдә йәннәткә китһәм, һинең аяҡтарыңдың тауышы ишетелә. Үткән төндә мин йәнә ожмахҡа ингәйнем, һәм ҡабат һинең аҙымыңды ишеттем", - тигән. Билал (радиаллаху анху) әйткән: "О, Аллаһ илсеһе! Аҙан ҡысҡырғандан һуң мин һәр ваҡыт ике рәкәғәт намаҙ уҡыйым. Тәһәрәтем бөтһә, намаҙ ваҡытын көтмәйенсә, йәнә йыуынам. Тәһәрәт булғас, ниңә тағы ике рәкәғәт намаҙ уҡымаҫҡа, тип уйлайым һәм йәнә намаҙ ҡылам".

Сәхәбәләрҙең береһе Әбү Хөрәйра (радиалаху анху) тәһәрәт алғанда ҡулдарын яурынына тиклем йыуа торған булған. "Был ниндәй тәһәрәт?" тип һорағандарға ул шулай яуап ҡайтарған: "Рәсүллуллаһ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән һүҙҙәрҙе ишеттем. Ул былай тигәйне: "Ҡиәмәт көнөндә мөъминдең нуры, йәғни мөъмин тәнендәге нур, тәһәрәт алғанда һыу ҡайҙа тиклем барып еткән, шул урынғаса етеп яҡтырасаҡ".

Сәхәбәләр Бәйғәмбәрҙән (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм), өммәтендә булыусыларҙы нисек таныясаҡһың, тип һораған. "Күҙ алдына килтерегеҙ, берәүҙең маңлайы һәм аяҡтары аҡ төҫтә булған аты бар, ти. Үҙ атын хужаһы ҡара йылҡылар араһында танымаясаҡмы ни? Тимәк, имандаштарыбыҙҙың йөҙҙәре, тәһәрәт алғанға күрә, нур менән яҡтырып торасаҡ. Аяҡ-ҡулдарында ла нур буласаҡ. Үҙ йылғама иртәрәк килеп, бүләктәр таратыр өсөн уларҙы көтөп торасаҡмын. Иғтибарлы булығыҙ. Ҡайһы бер кешеләрҙе фәрештәләр йылғамдан ҡыуып торасаҡ. Дөйә көтөүенән сит дөйәне ҡыуған кеүек. Сөнки улар Аллаһ күрһәткән юлдан ситләшкән буласаҡ", - тип яуаплай Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм).

● **Әйткәндәй,** Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: "Намаҙ уҡып ултырыусы алдынан үтеп киткән кеше үҙенең ниндәй ҙур гонаһ ҡылғанын белһә, доға уҡыуҙың тамамланыуын 40 көн көтөргә лә әҙер булыр ине". Был гонаһ тураһында бөтә хәҙистәрҙә лә әйтелә. Башҡалар был хатаны ҡылмаһын өсөн иманлы кеше үҙе лә хәстәрлек күрергә бурыслы. Намаҙ уҡырға йыйынғанда, ул ултырған урынды ситләп үтһендәр өсөн, алдына берәй әйбер һалып ҡуйырға мөмкин. Кеше намаҙ ҡылыусы алдынан үткәнен һиҙмәй йә был ҡылыҡтың гонаһ икәнен белмәй икән, эргәһендә булған мосолмандар уны иҫкәртергә тейеш. Уның юлын ҡыйып, "Собханаллаһ" тип әйтергә кәрәк. Был талап намаҙ ҡайҙа уҡылыуға ҡарамаҫтан - асыҡ һауаламы, мәсеттә, башҡа урындамы - үтәлергә тейеш. Намаҙ ҡылыусы ҡарашын сәждә урынына төбәргә һәм ян-яҡҡа ҡарамаҫҡа тейеш. Сит тауыштар иһә иманлының тыныслығын боҙа һәм Аллаһ менән аралашырға ҡамасаулай. Шуға гонаһ намаҙ ҡылыусыны борсоған кешегә яҙыла.

● **Бер риүәйәт.** Юлдан китеп барыусы бер йәйәүле сүлмәк күреп ҡала һәм уны таяғына эләктереп, ситкә ырғыта (мосолман кешеһе юлсыға ҡамасауларҙай, зарар килтерерҙәй әйберҙе юлдан ситкә сығарып ташларға бурыслы). Сүлмәк эсендәге йылан йәйәүлегә ташлана. Сүлмәктә сағында 2-3 ҡарыштан артыҡ оҙон булмаған был йылан күҙ алдында ҙурайып, 5-6 ҡолас оҙонлоғона етә һәм юлсыны быуа башлай. Юлсының тын алырлыҡ та хәле ҡалмай. Ярҙам итерҙәй берәй йән эйәһе юҡмы икән тип, тирә-яғына күҙ һала. Ҡапыл йәйәүле ғәскәрҙең биш һалдаты күренә. Бәләгә тарыған йәйәүле баштан-аяҡ ҡоралланған һалдаттарға ярҙам һорап ҡысҡыра. Әммә һалдаттар уға иғтибар итмәйенсә үтеп китә.

Йылан табышын быуыуҙы дауам итә. Бәләгә тарыған кеше ҡотолоуҙан өмөтөн өҙмәй. Берәйһе килеп сыҡмаҫмы, тип тағы юлға ҡайырылып ҡарай. Унда утыҙ һалдаттан торған һыбайлы ғәскәр күренә. Бөтә көсөн йыйып, юлсы һыбайлылырға ҡысҡыра, ярҙам итеүҙәрен үтенә. Һыбайлылар тағы үтеп китә.

Бер аҙҙан юлда һылтыҡлай-һылтыҡлай атлап килеүсе зәғиф, сибек, йолҡош ҡына бер кеше күренә. "Йәйәүле ғәскәр ҙә, атлы ғәскәр ҙә ҡотҡарманы. Был меҫкен генә кешенең ярҙамы тейерме икән?" - тип икеләнә хәле мөшкөл юлсы. Шулай ҙа уға өн-дәшеп, ярҙам итеүен үтенә. Сибек юлсы ниндәйҙер доға уҡып, сүлмәкте юл ситенә ҡуя. Йылан яңынан бәләкәй хәлenә ҡайта һәм сүлмәккә инеп юғала.

Бәләнән ҡотолған кешегә ҡотҡарыусыһы ошоларҙы һөйләй:

- Йәйәүле ғәскәрҙең биш һалдаты - биш ваҡыт намаҙың. Һин биш ваҡыт намаҙыңды уҡымағанһың. Шуға күрә теге биш һалдат һине күрмәгән дә, ишетмәгән дә. Ә инде утыҙ һыбайлы - утыҙ көнлөк ураҙаң. Һин ураҙа тотмағанһың. Шуға улар һиңә ярҙам итмәгән...

● **Ә ҡотҡарыусы кем булған һуң?** Ҡасандыр бер фәҡиргә ярты икмәкте саҙаҡа итеп биргән була юлсы. Сибек, аҡһаҡ кеше - ана шул саҙаҡа булған икән. Ихлас күңелдән бирелгән саҙаҡа әҙәм балаһын бәләгә тарығанда хәленән килгәнсе ҡотҡарырға тырыша ла инде. Исламда саҙаҡаның күләме билдәләнмәгән. Сөнки саҙаҡаны һәр кем ихлас күңелдән, хәле еткән күләмдә бирә. "Саҙаҡаны үҙеңдән башла", тигән бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис сәләм. Саҙаҡа кемгәлер бирелгән тиндәр йәки һумдар ғына түгел. Саҙаҡа изгелек итеү, яҡшылыҡ эшләү, һүҙ менән дә, мал менән дә ярҙам итеүҙе аңлата. Шуға күрә кеше иң беренсе нәүбәттә үҙен хәстәрләргә бурыслы. Үҙен хәстәрләй, үҙенең хәлен еңеләйтә, үҙенә изгелек эшләй алмаған кеше бүтәндәргә нимә менән ярҙам итә алһын инде?

Унан һуң, саҙаҡа үҙеңдән артып ҡалғанда ғына бирелә. Үҙеңдең тамағың ас икән, ҡулыңдағы һуңғы телем икмәкте бүтәндәргә биреү аңлы эш рәтенә инмәй. Кеше иң элек үҙен тәьмин итергә бурыслы. Шунан һуң иң элек үҙеңдең яҡын кешеләреңде ҡарарға тейешһең. Үҙең дә, яҡындарың да мохтаж түгел икән, артабан күршеләреңде, дуҫиштәреңде хәстәрләйһең. Уларҙың мохтажлығы юҡ икән, шул сағында инде сит кешеләргә - мохтаждарға, меҫкендәргә, фәҡирҙәргә ярҙам итәһең. Был мәсьәлә Исламда ҡәтғи тәртипкә һалынған һәм кешелек йәшәйешенең иң юғары ҡаҙанышын билдәләй.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# КӘЗӘ ҠЫМЫҘЫН - ҺӘР ӨЙГӘ!

**Ошо арала Учалы районы Рысай ауылы ағинәйе Вәзимә Зәйнәғәбдинова өй шарттарында кәзә ҡымыҙы эшләү буйынса оҫталыҡ дәресе ойоштторҙо.**



Был оҫталыҡ дәресендә ауыл ағинәйҙәре, уҡыусы ҡыҙ балалар ҙа ҡатнашты. Вәзимә Зәйнәғәбдинова шәхси хужалығындағы кәзәне һауғандан һуң нисек ҡымыҙ бешергә икәнен күрһәтте. Кәзә ҡымыҙының организм өсөн файҙаһы тураһында һөйләне. "Бөгөн һәр кем шәхси хужалығында бейә тота алмай, ә бына кәзәне һәр кем аҫрай һәм һәр кем кәзә ҡымыҙы менән туҡлана ала", - тип, йыйылыусыларҙы дәртләндереп тә ебәрҙе ағинәй. Иң мөһиме, уның һабаҡтарын балалар ишетте. Илсе мәктәбе уҡыусыһы Динә Мортазина ағинәйҙең артынса кәзә һауыу, уның һөтөн ҡымыҙ итеп бешеү кеүек ғәмәлдәрҙе ҡабатлап, яңы кәсеп үҙләштереп ҡыуанды.



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Белореченскому избирательному округу №5 **Байрамгулову Радмиру Рафисовичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Ленинскому избирательному округу №7 **Филиппову Олегу Игоревичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Пушкинскому избирательному округу №6 **Файзуллиной Елене Юрьевне** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Студенческому избирательному округу №12 **Зарипову Шамилю Ришатовичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".




Печатная площадь предоставлена безвозмездно избирательному объединению "БАШКИРСКОЕ РЕСПУБЛИКАНСКОЕ ОТДЕЛЕНИЕ политической партии "КОММУНИСТИЧЕСКАЯ ПАРТИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ" на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".




Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Новиковскому избирательному округу №14 **Габдрашитову Радмиру Илгизовичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".

## ИЛЬДАР ЗАЙНЕТДИН



кандидат в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Черниковскому избирательному округу №4 от партии "Родина"

ПАРТИЯ РОДИНА РОССИЯ

Руководитель Центрального штаба формирования добровольческих батальонов РБ

**Программа кандидата:**

- Необходимо обеспечить безопасность государства, его обороноспособность, потребности СВО, учитывая нужды всех звеньев военно-промышленного комплекса и армии. В том числе - вопросы кадрового обеспечения.
- Страна должна встать на рельсы мобилизационной экономики.
- Необходима кадровая революция сверху.
- Нужна новая миграционная политика!
- Поддержка участников СВО и членов их семей!
- Поддержка многодетных семей!

**За Родину!**

Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Черниковскому избирательному округу №4 **Зайнетдину Ильдару Ураловичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".




Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Первомайскому избирательному округу №3 **Саитгарееву Рустаму Раисовичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".




Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Вазовскому избирательному округу №11 **Сайфуллину Вадиму Рашитовичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".




Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Вокзальному избирательному округу №13 **Гайнетдиновой Фание Фаргатовне** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 8 СЕНТЯБРЬ - БАШҠОРТОСТАН ХАЛЫҠТАРЫНЫҢ МИЛЛИ КЕЙЕМЕ КӨНӨ

**Был күркәм байрам Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың Указына ярашлы республикабыҙҙа 2020 йылдан алып йылына ике тапҡыр: апрелдең өсөнсө йомаһында һәм сентябрҙең икенсе йомаһында уҙғарыла. Быйыл Башҡортостан Республикаһы территорияһында йәшәгән барлыҡ халыҡтарҙың милли кейемдәренә арналған саралар 8 сентябргә тура килә. Был көндә һәр кем үҙенең милли кейемен кейеп урамдарға сыға, социаль селтәрҙәрҙәге флешмобтарға ҡушыла, төрлө байрам сараларында ҡатнаша.**



Беҙ иһә, сираттағы башватҡысты халыҡтарҙың милли аяҡ кейемдәренә арнаныҡ. Борон аяҡ кейемдәрен йүкә, йөн, күндән эшләп кейгәндәр һәм һәр халыҡтың үҙ алымы, үҙ атамаһы булған. "Кейемен күр ҙә хәлен күр" тип тә юҡҡа ғына әйтмәгән боронғолар, кешенең етеш йәшәү-йәшәмәүен аяҡ кейемдәренә ҡарап та төҫмөрләгәндәр. Эшкә һәм байрамға ғына кейелгәндәре лә булған. Күп халыҡтарҙа үҫемлектән эшләнгән аяҡ кейемдәре бар: японарҙа "варадзи" һалам сандали һәм "фукагуцу" һалам итек, корейҙарҙа һаламдан "чипсин", Швейцарияла "штрошу", урыҫтарҙа "лапти", башҡорттарҙа "сабата" һ.б. Әйткәндәй, хатта сабатаны ла байрамға һәм эшкә тәғәйенләп үргәндәр. Мәҫәлән, удмурттар уны эш өсөн - 7 йәки 5 ҡурыҙдан, байрамға - 11 йәки 9 ҡурыҙдан үргән һәм ҡаҙ ҡауырһыны, ҡара клеенка, ҡалай менән биҙәгән. Уларҙың сабатаһы башҡаларҙыҡынан осораҡ башлы булыуы менән дә айырылып торған.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**32-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ғазин. Балапан. Мамай. Остаз. Ҡоҙоҡ. Авокадо. Яковлев. Тамыр. Орғасы. Ыҙа. Ҡор. Торҡа. Инша. Ниәт. Баҫма. Ацтек. Ус. Ахун. Панда. Дүнәжен. Йырҡыс.

**Вертикаль буйынса:** Ярынбаш. Ойошма. Ат. Лезгинка. Бала. Халдей. Завод. Ғалим. Ҡатын. Әсә. МакКарри. Ур. Серге. Нанай. Нәс. Ҡот. Табип. Авто. Ысыҡ. Ҡыр. Атама.



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Первомайскому избирательному округу №3 **Егошину Вадиму Игоревичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Вазовскому избирательному округу №11 **Искандарову Азату Ганиевичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".

*АҢЛАТАБЫҘ...*

## ТҮЛӘҮҺЕҘ БЕЛЕМ

**2023 йыл башынан Башҡортостанда йәшәүселәр "Демография" милли проекты буйынса түләүһеҙ уҡыуға 3,2 мең килешеү төҙөгән. 3,4 меңдән ашыу ғариза хупланған да инде.**

Республикала йәшәүселәр өсөн ҡайтанан уҡытыу буйынса 129 программа ҡаралған. Улар ярҙамында һөнәри белем алырға йәки үҙ һөнәреңбуйынса квалификацияңды күтәрергә мөмкин. Программалар хеҙмәт баҙары талаптарын иҫәпкә алып төҙөлгән. Ошоға тиклем милли проект сиктәрендә 1,5 мең кеше яңы һөнәр үҙләштергән. Иң талап ителгән һөнәр эйәләре - психолог-консультант, маркетплейс менән эшләү буйынса менеджер, график дизайнер, программа тәьминәтен һынаусы, бухгалтер, мәғлүмәттәр аналитигы, smm-белгес.

Был - эш әҙләп, өҙләкһеҙ тест үтеп арығандар өсөн уңай мөмкинлек. Түбәндәгеләрҙе генә үтәргә кәрәк:

- "Рәсәйҙә эш" сайтына инеп, "Белем биреү программалары исемлеге" бүлеген һайларға;
- ҡыҙыҡһындырған программаға ғариза бирергә;
- мәшғүллек үҙәгендә һөнәри йүнәлеш алырға һәм кәрәкле документтарҙы тапшырырға;
- ҡарар ҡабул иткәндә көтөргә, уны 7 эш көнө дауамында ҡабул итәсәктәр.

Ғаризаның статусын "Мин белем алам" бүлегендәге шәхси кабинетта күҙәтеп барырға мөмкин. Уҡыу формаһы - көндөҙгө бүлек йәки дистанцияла. Уҡыу оҙайлығы - өс аҙнанан өс айға тиклем.



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Инорсовскому избирательному округу №2 **Куликову Константину Викторовичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ ЙӘНҺҮРӘТ

**Рәсәй киноһы көнөндә Өфөләге "Родина" кинотеатрында тәүге тапҡыр "Төньяҡ амурҙары" яңы анимацион фильмы күрһәтелде. Уны Ә. Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы "Муха" студияһы менән берлектә төшөргән.**



Фильм менән продюсер Артур Абдрахманов, киностудия директоры Юнир Әминев һәм рәссам Камил Бұҙыкаев таныштырып һөйләне. Йомағужа батыр, Ҡылысбай аҡһаҡал, солоҡсолар Ихсан һәм Усман, йәш егет Ғәбит, батыр йәрәкле яугир ҡыҙ Агдалия тураһындағы мажаралы, сағыу йәнһүрәт кескәйҙәргә лә, уларҙың ата-әсәйҙәренә лә хуш килде, алҡыштар оҙаҡ ҡына тынмай торҙо.

"Төньяҡ амурҙары" тулы метрлы анимацион фильм 31 августан Башҡортостандағы барлыҡ кинотеатрҙарҙа күрһәтелә башлаясаҡ, ә 12 октябрҙән - бөтә ил буйынса. Фильмды русса ла, башҡортса ла тауышландырғандар, шуға тамашасылар үҙҙәре теләгән телдә һайлап ҡарай ала. Йәнһүрәттәге ваҡиғалар 1788 йылғы урыҫ-швед һәм 1812 йылғы Ватан һуғыштарында ҡатнашҡан башҡорттар тарихы тирәләй үҫешә. Проектҡа бик күп билдәле шәхестәр йәлеп ителгән. Мәҫәлән, фильмда Екатерина II Лилиә Ғүмәрова тауышы менән һөйләшә, Александр I - Асҡар Абдразаҡов, шулай уҡ мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, билдәле комментатор Азамат Моратовтың да тауыштарын танырға була. Йырсылар Иҙрис Ғәзиев (Ҡылысбай) һәм Нәзифә Ҡадированың (Ҡылысбайҙың ҡатыны) да тауыштары яҙҙырылған. Ә йәш яугир Ғәбиттең тауышын тәү сиратта балалар таный. "Беҙҙең "Төньяҡ амурҙары" тулы метрлы анимацион фильм әҙер һәм 31 августан уны күрһәтә башлаясаҡбыҙ. Йәнһүрәтте беренсе булып Башҡортостан халҡы ҡараясаҡ, ә 12 октябрҙән Рәсәй прокатына сыға. Мин авторҙарҙы ҡотлайым, барыбыҙҙы ла ошо ваҡиға менән тәбрикләйем. Һәм бөтәһен дә кинотеатрҙарға саҡырам", - тип яҙҙы социаль селтәрҙәрҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.

# ЕТЕМДӘР ТОРМОШОНАН...

**Ошо көндәрҙә Башҡортостанда балалар йорттары тәрбиәләнеүселәренә арналған "Беҙҙе ҡалдырмағыҙ" тулы метражлы художестволы фильм төшөрөлә башланы.**

Уның нигеҙендә - башҡорт яҙыусыһы Айгиз Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма мине, әсәй!" повесы. Кино төшөрөүҙең тәүге көндәре Иглин районының Охлебинин ауылында үтә. Рус теленДәге фильм Ә. Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы тарафынан төшөрөлә. Китап буйынса сценарийҙы Мәғәфүр Тимербулатов яҙған, режиссеры - Вилүрә Иҫәндәүләтова, был уның тулы метрҙа дебют кинокартинаһы. Төп ролдәрҙә Ансар Шәйәхмәтов, Григорий Казаков, Семен Шарыгин, Сәйҙә Әминева, Эльмира Юлдашева уйнай. Шулай уҡ тамашала билдәле башҡорт актерҙары Алмаз Әмиров, Фирғәт Ғарипов, Айһылыу Йомағолова һәм башҡалар ҡатнаша.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Айгиз Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма мине, әсәй!" автобиографик әҫәре балалар йорттары тәрбиәләнеүселәренең ауыр яҙмышы хаҡында. Повесть бик күп телдәргә тәржемә ителгән, уҡыу программаларына индерелгән, бестселлер тип иғлан ителгән. Әҫәр буйынса ҡуйылған спектаклдәр Башҡортостан, Татарстан, Бүрәт, Ҡалмыҡстан республикалары һәм Ҡаҙағстан театрҙарында ҙур уңыш менән бара.

# ШАҒИР ИҪТӘЛЕГЕНӘ...

**Ошо көндәрҙә Санкт-Петербургтың Дәүләт академия капеллаһында билдәле башҡорт шағиры, Көньяҡ Уралда тыуып үҫкән Сәләм Ғәлимовтың иҫтәлеген мәңгеләштереүгә арналған сара үтте.**

Кәңәшмә барышында Ғәлимов Сәләм ерләнгән урынды эҙләү мәсьәләләре, Өфө һәм Санкт-Петербург архивтарында булған документтарҙан яңы мәғлүмәттәр ҡаралды. Спикерҙар шулай уҡ Силәбе өлкәһенең Сосновка районында классиктың иҫтәлеген мәңгеләштереү буйынса алып барылған эш хаҡында һөйләне. Ҡатнаш режимда уҙған фекер алышыу майҙансығында Башҡортостандың Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле урынбаҫары Илдар Бикбаев, Санкт-Петербургтың Милләттәр йорто директоры Алексей Карлов, "Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)" халыҡ-ара йәмәғәт ойошмалары союзы рәйесе Юлдаш Йосопов, Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге вәкиле Әлфир Байымов, Санкт-Петербург башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) рәйесе Гөлназ Ибраһимова, шулай уҡ ғалимдар һәм йәмәғәтселек вәкилдәре ҡатнашты. "Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге даими вәкиллеге, урындағы башҡорттар ҡоролтайы күренекле башҡорт эшмәкәрҙәренең хәтерен мәңгеләштереүҙә даими рәүештә ярҙам күрһәтә. Был тарихты тергеҙеүгә һәм һаҡлауға йүнәлтелгән бик мөһим эш, бигерәк тә үҫеп килгән быуын өсөн. 2021 йылда Ғәлимов Сәләм ҡәберен табыуға булышлыҡ итеү үтенесе менән беҙгә Сосновка районының "Камин янында" район әҙәби берекмәһе етәксеһе Урал Ҡолошов мөрәжәғәт итте. Ул ваҡытта шағирҙың 1939 йылда Санкт-Петербургта вафат булыуы һәм ҡәбере Волхов лютеран зыяратында булыуы ихтималлығы билдәле ине. Архив документтары менән эшләгәндән һуң, Өфөләге һәм Санкт-Петербургтағы тикшеренеүселәр ҡәбер ташы ҡуйылған урынды асыҡлай алды", - тип билдәләй Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге даими вәкиле Әлфир Байымов.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**6 сентябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури), драма. 16+

**7 сентябрь "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**2 сентябрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 12.00 0+

**"Аҡмулла"** (З. Бураҡаева), ҡисса. 18.00 6+

**9 сентябрь "Волшебная мельница"** (М. Кәрим), әкиәт. 12.00 0+

**"Башҡорт туйы"** (М. Буранғолов), романтик драма. 18.00 12+

**10 сентябрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 12.00 6+

**"Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миннуллин), тамаша. 18.00 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**5 сентябрь "Золотой цыпленок"** (В. Орлов), музыкаль әкиәт. 10.00 0+

**6, 8 сентябрь Премьера! "1+1=3 или математика судьбы"** (Б. Ҡаһарманова), драма. 13.00, 15.00 12+

**7 сентябрь "Правда за нами..."** әҙәби-музыкаль лекторий. 10.00 0+

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЙӨРӨГӘН АЯҠҠА...

## йүрмә йә ярма эләгә

Аяғына тартһа - башына юҡ, башына тартһа - аяғына юҡ йүнһеҙ ирҙең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Һинең хаталарыңды әҙләүсе дошман һинең хаталарыңды йәшерергә тырышыусы дуҫыңдан мең мәртәбәгә файҙалыраҡ.

**(Леонардо да Винчи).**

Мөхәббәт тарихы мөһим түгел. Һәр кемдең яратыу һәләтенә эйә булыуы мөһим.

**(Хелен Хейс).**

Аҡсаға яҡшы эт һатып алып була, ләкин уны ҡойроҡ болғарға мәжбүр итеп булмай.

**(Джон Биллингс).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер сауҙагәр арбаға 50 төк мамыҡ тейәп, баҙарға һатырға алып киткән. Ял итеп алырға тип уйлап, атын юлдан ситкә бороп, Будданың таш һыны янында туҡтаған. Бик арыған булғанлыҡтан, сауҙагәр тиҙ генә йоҡлап киткән. Уянһа, арбалағы мамыҡ төктәренән елдәр иҫкән, ти. Тауарының юғалыуы тураһында ул урындағы властарға хәбәр иткән. Был эште тикшереү Оока исемле судьяға йөкмәтелгән. Ә судья үҙ сиратында шундай сәйер ҡарар сығарған:**

**- Минең уйымса, мамыҡты Будда урлаған. Уның бурысы кешеләр тураһында ҡайғыртыу булһа ла, ул үҙенең был бурысын инҡар иткән. Шулай булғас, мин Будданы ҡулға алырға бойорам...**

**Полиция хеҙмәткәрҙәре судьяның ҡарарын үтәп, Будданың таш һынын суд йортона алып килгән. Был хәлгә ғәжәпләнеп тә, ҡыҙыҡ күреп тә, полицейскийҙар артынан ҙур төркөм халыҡ эйәргән. Суд башланғас, йыйылған халыҡ судьяның ҡарарын тикшереп, көлөшә башлаған.**

**- Һеҙ минең хөкөм ҡарарынан көлөргә батырсылыҡ итәһегеҙме? - тип ярһыған шул саҡ судья. - Тимәк, һеҙ батшаның судын хөрмәт итмәйһегеҙ булып сығаһығыҙ? Улай булғас, һеҙҙең барығыҙҙы ла төрмәгә ултыртасаҡмын һәм штраф түләтәсәкмен...**

**Кешеләр тынып ҡалған һәм берәм-берәм судьянан ғәфү үтенә башлаған.**

**- Ярай, ярай, - тип йомшара төшкән судья. - Мин һеҙҙе төрмәгә ултыртмайым, ә штраф ҡына түләтәм. Минең хөкөм ҡарарым шулай: һәр берегеҙ бөрәр төк мамыҡ алып киләһегеҙ. Кем дә кем был ҡарарҙы үтәмәй, ул ҡулға алынасаҡ...**

**Кешеләр суд йорто янына төкләп мамыҡ ташый башлаған. Бер төктә сауҙагәр үҙенең тауарын таныған һәм шулай итеп бур фашланған. Ҡалған төктәрҙе аҡыллы судья ҡабат хужаларына ҡайтарып биргән..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
1 сентябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2700
Заказ - 1195